ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

9-15 апрель (алағарай) 2016
№ 15 (693)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Аҫалы балаҫтар ҙа...
аҫыл рухыбыҙҙы һаҡлай



6

Атайығыҙ полковник икән...
һеҙ генерал булырға тейешһегеҙ



8-9

Хоҙай тел аҫкыһы биргән икән...



10

Ырымбур шәлеме, әллә беҙҙекеме?



12

ТВ-программа 14

*Ат эскән сығанаҡтан һыу эс - ул бер ваҡытта ла бысраҡ һыуҙы эсмәй. Бесәй ятҡан урынға түшәгеңде йәй. Ҡорт ашаған алманы тәмлә. Һуҡыр сысҡан ҡаҙыған ергә ағас ултырт. Йылан ҡыҙынып ятҡан урынға йорт төҙө. Ҡоштар эҫенән ышыҡланған урынға ҡоҙоҡ ҡаҙы. Күберәк йәшел төҫтәге йәшелсә-емеш менән ризыҡлан - мускулдарың ныҡлы, йөрәгең бирешмәҫ булыр. Күберәк йөҙ - ерҙә лә, һыуҙа ла үҙеңде балыҡтай тойорһоң. Аяҡ аҫтыңа түгел, йышыраҡ күккә ҡара - уйҙарың яҡты һәм ғәмле булыр. Күп һөйләүгә ҡарағанда, өнләшмәүҙе хупла - күңелеңә лә тынлыҡ урынлашыр һәм рухың тынысланыр.*

**Серафим Саровский.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Балалар һаман да космонавт булырға хыялланамы, әллә башҡа төрлө һөнәрҙәр үҙләштерергә лә ниәттәре бармы?

*Светлана ЮЛБИРҘИНА, Өфө районы Шамонино мәктәбенең башланғыс класс уҡытыусыһы:*
Бөгөнгө балалар араһында, космонавт булам, тип хыялланыусылар юҡ тиһәң дә була. Бәлки, эстән генә ошо хыялды йөрөткәндәр барҙыр ҙа, ләкин анкета, һорау алыуҙар һөҙөмтәһенә ҡарап фекер йөрөткәндә, күпселек хәҙер банкир, бизнесмен, начальник булам, тип белдерә, полицияла эшләргә ниәтләүселәр ҙә байтаҡ. Был инде малайҙар тураһында, ә ҡыҙҙар уҡытыусы, тәрбиәсе булам, тип ҡыуандыра мине. Бишектәге бишкә төрләнә, тигәндәй, мәктәпте тамамлағансы балаларҙың да хыялдары әллә нисә төргә үҙгәрер әле, моғайын. Был ғәжәп тә, насар ҙа түгел. Минеңсә, һәр быуындың - үҙ хыялы. Заманына ҡарап та, йәмғиәттең теге йә был өлкәһендә прогресс, үҫеш алған йүнәлештәргә бәйле лә, тип уйлайым. Бынан 20-30 йылдар элек, заманалар тотороҡлораҡ булған мәлдәрҙә, беҙҙең хыялдарыбыҙ ҙа "һауанан" түгел, ә ысынбарлыҡтан, әйләнә-тирәбеҙҙәге өлгөләрҙән юл алды. Мин үҙем, мәҫәлән, бәләкәй саҡта фәҡәт уҡытыусы, тәрбиәсе булырға хыялланған булһам, шул ниәтемә тоғро ҡалдым: педколледж тамамлап, балалар баҡсаһында бер аҙ тәжрибә туплағас, педуниверситетҡа индем. Эшем оҡшай. Бала саҡта ике туған һеңлекәштәрҙе, күрше-күләндәге тиҫтерҙәрҙе теҙеп ултыртып, уҡытырға ярата торғайным. Солан, һарай ишектәрен таҡта итеп, аҡбур, күмер менән яҙылған "Класта эш"тәр эҙҙәре әле булһа юйылмай һаҡланып ҡалған. Ныҡ уҡыттым мин уларҙы, "2" ҡуйһам, тегеләр илап ултырыр ине. Мәктәптән ҡайтып, сәй эсәләр ҙә минең өйгә йыйылып, тағы ана шулай уҡырға йөрөнөләр бер талай. Ә бына үҙемдең ҡыҙымдың хыялы үҙгәреберәк тора. Бер мәл, ветврач булам, ти ине, әле, эт-бесәйҙең бөрсәһе бар, ҡурҡам, мин кешеләрҙе генә дауалармын инде, тип хәл итте. Ҡустымдың өс малайы ла, армияға барабыҙ, һалдат булабыҙ, тип хыяллана. Әйҙә, барһындар, хеҙмәт итһендәр, тик донъялар ғына тыныс булһын!

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# ЗАМАНСА УҠЫТ...

## әммә телебеҙгә һөйөү тәрбиәлә!

**Ошо көндәрҙә баш ҡалала "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурсын йомғаҡлау тантанаһы үтте. Егерме беренсе тапҡыр ойошторолған конкурста Башҡортостандан, Татарстандан, Силәбе һәм Ырымбур өлкәләренән бөтәһе 46 педагог көс һынашты. Улар сәмле ярышта ҡатнашып, фекерҙәштәр табыу, тәжрибә уртаҡлашыуҙы ла маҡсат итеп килгәйне.**



*Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - Фаягөл Әмирханова.*

"Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурсының маҡсаттары төрлө, әммә иң мөһиме - башҡорт халҡының киләсәге өсөн эшләгән уҡытыусыларҙың заман талаптарына яуап биреү-бирмәүе лә һынала бында. Сөнки һуңғы йылдарҙа педагогтар эшмәкәрлеге ҡырҡа үҙгәрештәр кисерҙе. Яңы стандарттарға ярашлы дәреслектәр талап ителә, уҡытыу пландары яңырҙы. Балаларҙың талаптары үҙгәреүе, йәғни уларҙың алдынғы технологияларҙы биш бармағы кеүек белеүе, компьютер, гаджеттар менән иркен ҡулланыуы ла уҡытыусыларҙы белемдәрен камиллаштырырға этәрә. Уҡыусыны үҙаллылыҡҡа, фекерләргә өйрәтеү, туған теле аша милли рух уятыу өсөн педагогтар бер үҙгәрештән дә артта ҡалмаҫҡа тейеш. Быйылғы конкурста ҡатнашыусылар ошо йәһәттән ниндәй уңыштарға өлгәшеүен асыҡ дәрес, мәғариф проекты, педагогик инициатива һәм оҫталыҡ дәресе аша сағылдырҙы. Конкурстың баһалама рәйесе, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның башҡорт филологияһы факультеты деканы Луиза Сәмситова әйтеүенсә, ярышҡа үҙ эшенең оҫтаһы булған педагогтар килгән. "Федераль дәүләт стандарттарын яҡшы белеү конкурстың төп талаптарының береһе ине, баһалама ағзалары ошо факторға ҙур иғтибар бүлде.

**(Дауамы 5-се биттә).**

12+

✔ *Ҡасан беҙҙең мәктәптәр балаларҙың һәләттәрен иҫәпкә алған һөнәри йүнәлеш биреү буйынса махсус программа эшләп, уны тормошҡа ашыра башлар икән? Уларҙың ҡулынан күберәк эш килер ине, моғайын.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тәңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БАЛАЛАРҒА ҮРНӘК БУЛАЙЫҠ!

***Артур КӘБИРОВ, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актеры***: Баш ҡаланың башҡорт йәштәре ойоштороған сараларға йыш йөрөйөм. Туған телебеҙҙе, тарихыбыҙҙы, мәҙәниәтебеҙҙе яратыусы йәштәр күбәйә барыуына ҡыуанам. Улар һәр ваҡыт ололар менән бергә эшләргә, файҙалы яңы проекттар тормошҡа ашырырға әҙер тора. Һуңғы йылдарҙа Өфөлә йәшәүсе башҡорт йәштәре үткәргән акцияларға, сараларға, проекттарға Мәскәү, Санкт-Петербург һәм башҡа төбәктәрҙәге башҡорт йәштәре лә ҡушылды. Шуға күрә, ололарҙың, хәҙерге быуын тәрбиәһеҙ, рухтары юҡ, тигән фекере менән һис килешмәйем. Кемделер гәйепләр алдынан үҙеңдең ҡылыҡтарың тураһында уйлап ҡара, тип юҡҡа әйтмәйҙәр бит. Йәштәр ололарҙан өлгө ала. Насары ла, яҡшыһы ла - оло быуындан күсә. Шуның өсөн балаларыбыҙ, йәштәребеҙ дөрөҫ юлдан яҙмаһын, тормошта үҙенә урын таба алһын һәм шәхес булып үҫһен өсөн иң тәүҙә ололар үҙҙәре өлгө күрһәтергә тейеш. Яҡшы өлгө үҙ ғаиләндә башҡорт телендә һөйләшеү, халҡыңдың йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен үтәү, милли мөхит булдырыуҙан башлана. Лайыҡлы алмаш үҫтереү - ул милләттең киләсәге тураһында хәстәрлек күреү. Был хәстәрлекте башҡорт халыҡ әкиәттәре һөйләп, балаларҙы шул геройҙарҙың матур үрнәгендә тәрбиәләүҙән булһа ла башлайыҡ. Халҡыбыҙҙың арҙаҡлы шәхестәре өлгөһөн күреп үҫһәләр, балаларыбыҙҙа туған теленән һәм милләтенән тартыныу тигән күренеш юҡҡа сығасаҡ.

Башҡорт халҡының киләсәк яҙмышы бөгөн милләттәштәрҙең ниндәй эштәр башҡарыуына ҡайтып ҡала. Шуға, тик үҙ нәфсеңде генә ҡандырған ғәмәлдәрҙән баш тартайыҡ. Милләт өсөн кәрәк эштәрҙе ҡулдан килгәнсе, үҙ хеҙмәтең өсөн хаҡ һорамай эшләйек. Сөнки донъяла бөтә нәмә лә аҡса менән үлсәнмәй.

**Камила ҒӘЛИЕВА**
**яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Балалар һаман да космонавт булырға хыялланамы, әллә башҡа төрлө һөнәрҙәр үҙләштерергә лә ниәттәре бармы?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Зөлфиә ӘМИНЕВА, ике бала әсәһе:*** Улым бәләкәй саҡта, атаһынан күрептер инде, шофер, танкист булам, тип һаташты. Былтыр 9-ҙы бөтөрҙө лә, һис көтмәгәндә Өфөләге кооператив техникумға барҙы ла керҙе. Атаһы менән беҙ ҡаршы килеп маташманыҡ та, ҡыуандыҡ ҡына: бик тә актуаль өлкә һайланы улыбыҙ. Хәҙер бит ҡайҙа ҡарама - иҡтисадсы, финансист, менеджер, сауҙа хеҙмәткәрҙәренә һорау ҙур. Икенсе яҡтан ҡарағанда ла отто ғына улым: үҙе әйтмешләй, әлеге ҡот осорғос БДИ-нан ҡотолдо. 10-ынсы класта уҡып йөрөгән ике синыфташын осраҡтайным, "Рөстәмдең башы эшләне", тинеләр. Ҡыҙыбыҙ менән хәл башҡасараҡ тора. Уның бәләкәйҙән ижади өлкә - сәнғәтте үҙ итеүен хуплай торғайным, хәҙер быны ни тип әйтергә лә белмәйем. Йырсы йә драма артисы булып китергә лә тура килер уға, бәлки: һәләте бар. Тик быны беҙҙең күңелгә ятып етмәй был. Бөгөн үҙегеҙ күреп тораһығыҙ: артистар тормошо - тормошмо инде ул? Эш хаҡтарын ҡарағыҙ. Унан туктауһыҙ ҡыҫҡартыуҙар, ижади аттестациялар... Бөгөнгө киҫкен конкуренция шарттарында артист булыу өсөн һәләт кенә етмәй шул. Талантыңды күрһәтә, кәрәк икән - яҡлай ҙа белерлек характерың ғына түгел, арттан этеүсең дә булһын. Ҡайҙан табайым мин режиссер йә продюсер кейәүҙе уға? Танылыу яулау өсөн аҡса ла күп кәрәктер, тип уйлайым. Шуға ла ҡыҙыбыҙҙы әкренләп кенә ниәтенән һүрелдерергә ине иҫәп. Уның уҡ мәнфәғәтен уйлап, әлбиттә. Юғиһә, аҙаҡ буш хыялдары һауа шарылай шартлап, үкенеүе, алдаһыуы ла бар бит. Берәй етдиерәк һөнәр һайлаһын ине, тибеҙ. Ағаһы кеүек иҡтисадсы, менеджмент йә булмаһа, исмаһам, табип... Ошо уңайҙан бер фекеремде еткергем килә: баланың хыялын ысынбарлыҡҡа ашырыуҙа беҙгә иң тәүҙә мәктәп ярҙамға килергә тейештер ул. Ҡасан беҙҙең мәктәптәр балаларҙың һәләттәрен иҫәпкә алған һөнәри йүнәлеш биреү буйынса махсус программа эшләп, уны тормошҡа ашыра башлар икән? Уларҙың ҡулынан күберәк эш килер ине, моғайын.

***Искәндәр РӘХИМОВ, 8-се класс уҡыусыһы:*** Бәләкәйерәк саҡта хыяллана инем, кемдең космосҡа осҡоһо килмәһен инде! Ләкин ул буй етмәҫлек татлы хыял ине, шул уҡ ваҡытта архитектор ҙа, инженер булырға ла теләгем бар. Былары инде ергә яҡын һөнәрҙәр булараҡ, тормошҡа ашыуына шик ҡалдырмай торған реаль хыялдар. Ә космонавт булыу һинең теләгеңә генә бәйле түгел икән шул. Белемдән тыш, иң мөһиме - ҡоростай һаулыҡ кәрәклеге тураһында мин аҙаҡ ҡына уйлап еткерҙем һәм был хыялымдан үкенес кисермәй генә алыҫлаштым, сөнки, сер итеп кенә әйтәм, минең йыш ҡына хатта машинала, автобуста ла күңелем болғана. "Тормошҡа ысынбарлыҡтан сығып ҡарарға кәрәк", тип, атайым да минең ҡарар менән килеште, ләкин "Ә һуң армияла ни эшләрһең икән?" тип табиптарға йөрөтөп ҡараны. Хәҙер беҙ уның менән бергәләп вестибуляр аппаратты "йүнәтә" торған күнекмәләр эшләйбеҙ. Армияға барырмынмы - әйтә алмайым, тик мин инде хәҙер тиҫтерҙәрем араһында танылған блогер: сайтыма фекерҙәремде, тормошҡа ҡараштарымды теркәй барам, башҡалар менән аралашам, бәхәсләшеп тә алабыҙ. Айырыуса унда фотоһүрәттәр, видеороликтар төшөрөп һалырға яратам. Тағы ла бер серем: билдәле блогерҙар кеүек, ошо юл менән күп итеп аҡса эшләргә ине, тип хыялланам.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Апрелдән 2016 йылдың икенсе яртыһы өсөн гәзитебеҙгә яҙылыу хаҡтары бер аҙ ҡиммәтләнһә лә, уҡыусыларыбыҙ беҙҙең дуҫлыҡҡа тоғро ҡалыр, тип ышанабыҙ. Шулай итеп, бынан һуң 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 574 һум 32 тингә яҙыла алаһығыҙ. Ә гәзиттең 50673 индексы ойошмалар һәм предприятиелар өсөн тәғәйенләнгән һәм хаҡы - 604 һум 32 тин. 50665 индексы менән шулай уҡ Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I, II төркөм инвалидтары 511 һум 02 тингә яҙыла ала.**




● Дәртләндереү саралары дауам итә. Гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын апрелдә ебәргәндәрҙән кемдәрҙер бүләккә **"Ҡөрьән Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма", "400 башҡорт халыҡ йыры", "Башҡорттарҙың хәрби тарихы"** (русса) һәм башҡа китаптар алып ҡыуаныуы бик ихтимал.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға 438 һумға яҙылырға була.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға - 258 һум.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - 258 һум.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостанда "Реаль эштәр" проекты сиктәрендә ағымдағы йылға наказдар билдәләнде. "Берҙәм Рәсәй" партияһының төбәк бүлексәһендә хәбәр итеүҙәренсә, сходтар нигеҙендә "проблемалар банкы" булдырылған. Былтыр партия проекты сиктәрендә халыҡтың 900-гә яҡын башланғысы тормошҡа ашырылған. Ул сакта проекттың бюджеты 220 млн һум самаһы тәшкил иткән. Быйылға 152 млн һум күләмендә аҡса бүленгән.

✔Өфөлә йәштәрҙең мәшғүллеге мәсьәләләренә арналған халыҡ-ара конференция асылды. Сараның инициаторы - Халыҡ-ара хеҙмәт ойошмаһы. Өфө конференция уҙғарыу майҙансығы итеп осраҡлы һайланмаған. Халыҡ-ара хеҙмәт ойошмаһы вәкилдәре 25-26 ғинуарҙа Башҡортостанда үткән БРИКС илдәре хеҙмәт һәм мәшғүллек министрҙары осрашыуын юғары баһаланы һәм Өфөлә юғары кимәлдәге тағы ла бер сара ойоштороу тураһында ҡарар ҡабул итте.

✔Башҡортостан илдең кредит бирергә һәләтле 10 төбәге иҫәбенә инде. Был хаҡта "Рейтинг" агентлығы хәбәр итә. Мәскәү һәм Санкт-Петербург - кредит биреү һәләтлелеге индексы лидерҙары. Уларҙа был күрһәткес 100 процент тәшкил итә. Ун төбәк иҫәбенә шулай уҡ Мәскәү (96,7 процент), Ленинград (94,5) һәм Төмән (92,1) өлкәләре, Татарстан Республикаһы (90,3), Ханты-Манси автономиялы округы (87,2), Тула (85,3) һәм Липецк (84) өлкәләре ингән.

✔Фәнүр Йәғәфәров Башҡортостан Башлығының матбуғат секретары итеп тәғәйенләнде. Тейешле күрһәтмәгә Рөстәм Хәмитов ҡул ҡуйған. Республика Башлығының йәнә бер күрһәтмәһе буйынса Артем Вәлиев үҙ теләге менән Башҡортостан етәксеһенең матбуғат секретары вазифаһынан бушатылды.

✔Йыл башынан Башҡортостанда инфляция 1,8 процент тәшкил иткән, Рәсәй буйынса уртаса күрһәткес - 2,1 процент. Башҡортостанстат хәбәр итеүенсә, йыллыҡ иҫәпләү буйынса (2016 йылдың мартына 2015 йылдың мартына ҡарата) республикала инфляция 5,8 процент тәшкил иткән, ил буйынса уртаса - 7,3 процент. Статистар беренсе кварталда инфляция процестарының кәмеүен билдәләй.

✔Майҙа республика халҡын оҙайлы ял көндәре көтә. Башҡортостан Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, биш көнлөк эш аҙнаһында 30 апрель, 1, 2, 3 һәм 7, 8, 9 май ял көндәре булып тора. Йома 29 апрелдә һәм 6 майҙа эш сәғәттәре ҡыҫҡартылмай.

УЙЛЫҒА - УЙ

# АЛДЫР, УҠЫ, ТАРАТ,

## милли гәзитеңде ярат!

**Ҡөрьән Кәримдең "Әр-Рахмән" (Шәфҡәтле) сүрәһе 4-се аятында: "Һәр кемгә Аллаһ бөйөктәрҙән-бөйөк бер бүләк - әсә теле бирҙе", - тиелә. Бер кемдең дә Тыуған илен, ерен, милләтен, телен, рухын, йәнен, ата-әсәһен, балаларын һайлап алыу мөмкинлеге юҡ. Бөтәһе лә Хаҡ Тәғәлә бүләге - ошо хәҡиҡәткә кем ҡаршы сыға ала?**



Дин хөкөмөнән ҡарағанда, "Әр-Рахмән" сүрәһен уҡыған аҡлы кеше уйланырға тейеш: "Әсә телендә һөйләшмәү, уны үҫтереүгә ярҙам итмәү, шулай уҡ милли баҫмаларҙы алдырмау - ул Аллаһтың үҙенә ҡаршы сығыу түгелме? Ни өсөн мин донъяға башҡорт милләтенән булып тыуҙым, ни өсөн ошо иң матур, гүзәл Башҡортостан - тыуған ерем? Минең бурысым ниндәй, илем, милләтем өсөн ни эшләргә тейешмен? Ахырыһы, бәндә ошондай һорауҙарға яуап та эҙләмәй, уйланмай ҙа, шөкөр ҙә итмәй. Сөнки милли матбуғат баҫмаларында яҙылған хәҡиҡәти һүҙ, зыялылар тауышы уға барып етмәй. Ул башын интернеттағы "сүп-сар" менән тултыра, аҡын бөтөнләй башҡа ҡиммәттәр тураһында һөйләгән фильмдар менән ағыулай.

Ни өсөн йәмәғәт менән уҡыған намаҙ күпкә сауаплы? Ғилләһе шунда: мосолмандар бер-берсһен күреп, бер епкә теҙелә, берләшә. Ошо рәүешле үҙҙәрен, имандарын һаҡлай, тарҡаулыҡҡа юл ҡуймай. Милли баҫмалар алдырыу, уҡыу, таратыу ҙа шулай уҡ йәмәғәт менән башҡарылған намаҙ ролен үтәй. Ҡайһы милли гәзитебеҙ, журналыбыҙ әхлаҡһыҙлыҡты, яуызлыҡты алға һөрә, уҡыусыларын енәйәт ҡылырға саҡыра? Юҡ ундайҙар!

Егерме йылдар элек башҡорт мәктәптәре юҡ, гәзиттәребеҙ юҡ, тип зарландыҡ. Ә хәҙер милли мәктәптәребеҙ бар - балаларыбыҙҙы унда уҡытырға ашыҡмайбыҙ; милли гәзит-журналдарыбыҙ етерлек - тираждары йылдан-йыл кәмей; милли театрҙарыбыҙ ҙа, тамашасылары юҡлыҡтан, табышһыҙ булыуҙан ябыла башланы. Етмәһә, бәғзе берәүҙәр алдында ошо һорауҙарҙы ҡуйә-реп сыҡһаң, төрлө һылтау эҙләйҙәр: йә аҡса юҡ, йә кемдер оҡшамай, һәм башҡалар. Теләгәндәр мөмкинлек эҙләй, таба, сөнки телебеҙгә, мәҙәниәтебеҙгә хеҙмәт итеү, уны үҫтереүгә булышлыҡ итеү - Аллаһ алдындағы кешелек бурысыбыҙ. Был бурысты инҡар итеү - киләсәктә һәләкәт һәм фажиғә булып сағылыш табыуы ихтимал. Башҡорт ғаиләһендә донъяға килгән икән бала, атай-әсәй бурысы - әсә телен өйрәтеү, яратыу, башҡорт итеп тәрбиәләү. Шулай тәрбиәләй алмайбыҙ икән, тимәк, ата-әсә бурысын да үтәмәйбеҙ. Мосолмандар Аллаһҡа ата-әсәлек, кешелек бурыстарын үтәп яҡынлаша. Шул юлдарҙы таба белеү - иманлы булыу өлгөһө. Балаларыбыҙға милләтебеҙҙе яратырға өйрәтмәйенсә тороп, мин мосолман, тип йөрөү - аңһыҙлыҡ билдәһе.

Мин гәзит уҡыусыларға Рәүеф Насировтың ҡасандыр "Ағиҙел" журналында баҫылған "Иләмә хат" мәҡәләһенән бер өҙөк тәҡдим итәм. Хаттың авторы Талха Рәсүлев. Ул Зәйнулла ишандың ҡустыһы, урыҫ-япон һуғышы геройы, исеме "Илсе Ғайса" булып халыҡ араһында киң таралған Ғайса Рәсүлевтың улы. Әхмәтзәки Вәлидиҙең артынан эйәреп, сит илгә сығып китә һәм һуңынан Ҡытайҙа тимер юлдар һалыусы ҙур белгес булып таныла. Һуғыш алдынан Рәсәйгә килеп, тимер юл эштәре буйынса килешеүҙәр төҙөп, юл ыңғайында йәшерен генә ауылын барып күрә. Шулай иленә бер бағыр өсөн мөмкинлек таба, сит илдә ятып, Башҡортостан яҙмышы менән йәшәй, яйын табып, китап-гәзиттәр алдырып уҡый. Күптәребеҙ Назар Нәжмиҙең "Урал" поэмаһын уҡыу түгел, белмәйҙәр ҙә, ә ул поэма баҫылып сыҡҡандың икенсе йылында уҡ уҡый уны, үҙенең башҡорт рухына шик белдергән поэманы ҡабул итә алмай һыҙлана.

"Һаумыһығыҙ, хөрмәтле милләттәштәр! Был юлдарҙы алыҫ илдә көн итеүсе бер башҡорт яҙа. Һеҙ хат менән танышҡанда был донъяла мин булмамдыр. Шулай ҙа һүҙҙәрем ҡасан да булһа милләттәштәремә барып етер тип ышанам. Балаларыма, ейәндәремә хатымды берәй уҡымышлы башҡортҡа еткереүҙе васыят итеп ҡалдырам.

...Әле яҙғандарым ғына икеле булыр. Хәҙер хат яҙырға мәжбүр иткән сәбәпкә күсәм. Тик шуныһы: йәшәгән илемдә лә, исем-шәрифемде лә теркәмәйем. Башҡортостандағы яҡындарыма, таныштарыма ялҡыны тейер тип ҡурҡам. Зиһенле кеше былай ҙа кемлегемде яҡшы аңлар, төшөнөр. Күптән түгел шағир Назар Нәжмиҙең "Урал" поэмаһын уҡып сыҡтым да, үҙ фекеремде белдереп, хат яҙмай түҙә алманым. Оҫталыҡ яғынан поэма бик шәп, һүҙ тейҙерерлек түгел. Әсәрҙең "Урал" йыры менән бәйле булыуы уның әһәмиәтен тағы ла арттыра төшә. Һүҙем ул турала түгел.

Поэмала артист менән эмигрант башҡорттоң осрашыуы һүрәтләнә. Әсәр аҙағында шағир артистан: "Юҡ, һин барыбер башҡорт түгелһең", - тип әйттерә. Ни өсөн?

Башҡорттар нисәмә йыл, Урал, тип, даулашып, яулашып йәшәгән. "Аямаған тәнен, түккән ҡанын, һис бирмәгән башҡорт Уралын", - тип әйтелә "Урал" йырында. Әгәр яҙмыш инсанды иленән китергә мәжбүр итһә, башҡорт ни эшләргә тейеш һуң? Мин дә илемде ташлап китмәһәм, күптән теге донъяла булыр инем. Элекке арҡаҙаштарым, башҡорт данын бөтә донъяға билдәле иткән Әхмәтзәки Вәлиди Туған, Әбделҡадир Инан, Ғәлимйән Таған кеүек ғалимдар сит илдәргә китмәһә, күптән үлтерелгән булырҙар ине. Шунан, улар ҙа башҡорт түгелме ни?

...Алда яҙғанса, "Урал" поэмаһында артист менән эмигранттың осрашыуы тасуирлана. Ул эмигрант мин инем. Үтә бай булмаһам да, хәлле генә көн иттем. Поэмала яҙылғанса, бейә бәйләп, ҡымыҙ ҙа бештем. Тура килгәндә, Башҡортостандан килгән кешеләр менән дә осрашырға тырыштым. Тик ундай мәлдәр бик һирәк тура килде шул...

...Башҡортостандан артист килеүен ишеткәс, концертында булдым. Осрашыу ҙа насип итте. Бик оҙаҡ һөйләшеп тә ултырҙыҡ. Ул ҡурайҙа уйнаны, мин халыҡ йырҙарын һуҙҙым, эсемдәге һағышымды түктем. Был әңгәмә барышында "һин башҡорт, мин башҡорт, тигән" бәхәс-фәлән булманы. Ошо осрашыу хаҡында, күрәһең, артист шағирға һөйләгәндер инде. Ә Назар Нәжми, үҙ сиратында, поэма яҙған. Ул совет сәйәсәтенә ярақлаштырып, түбәндәге һығымтаға килгән:

*Башҡорт ҡына*
*шулай йырлай ала,*
*Ә шулай ҙа*
*һин бит ысын*
*башҡорт түгелһең...*

...Поэма 1976 йылда яҙылған. Мин уны икенсе йылында уҡ уҡыным. Хәҙер бик оло йәштәмен. Тик башҡорт рухыма ҡаршы яҙылған әсәрҙе күңелем ҡабул итмәй. Шуға ла илемә, милләттәштәремә үҙ фекеремде яҙып ебәреүҙе изге бурысым һананым. Әле ошо хатты яҙам, үҙем пластинканан "Илсе Ғайса" йырын тыңлайым. Күңелем менән Уралыма, Уй, Яйыҡ буйҙарына елдерәм.

Һөйөклө Уралым, Тыуған илем, милләттәштәрем! Был хат һеҙгә барып юлыҡҡанда, мин был донъяла булмам. Күңелем шулай һиҙә. Шулай ҙа яҙмам аша рухым һеҙҙең менән һөйләшер. Теләгем шул: башҡортлоҡтан мине һыҙып ташламағыҙ! Онотмағыҙ! Мин барыбер - башҡортмон! Һау сәләмәт булығыҙ!" (Хат ҡыҫҡартыуҙар менән бирелә).

Хәҙер башҡорт булып та, башҡортса һөйләшә белмәгән, үҙ балаһына әсә телен өйрәтергә теләмәгән атай-әсәйҙәр арта. Үҙ телендә матбуғат баҫмалары яҙҙырырға теләмәүҙе лә аңламайым. Башҡорт икән, үҙ Ватанына, үҙ рухына, ниндәй генә шарттарға ҡарамай, тоғро булып ҡалһын ул кеше. Барҙың ҡәҙерен белеп, юғалтмай һаҡлап, Аллаһ ризалығына ирешергә яҙһын. Ә бөгөн иһә, милли гәзиттәребеҙгә яҙылайыҡ, алдырайыҡ, уҡыйыҡ, һылтау түгел, яйын табайыҡ, тип өндәшкә килә милләттәштәргә.

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА,**
**педагогия хеҙмәте ветераны.**
**Мәләүеҙ ҡалаһы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия ғилми-тикшеренеү үҙәге интеллектуаль милектың ике объектын - учреждениеның тауар билдәһен һәм "Башҡорт балы" тауары етештерелгән урындың исеме менән файҙаланыу хоҡуғын Федераль таможня реестрында теркәне. Был Рәсәйҙән башҡорт балын экспортлауға һәм башҡа илдәрҙән: Украина, Үзбәкстан һәм Тажикстандан бал индереүгә контролде көсәйтеү өсөн эшләнгән.

✔13 апрелдә иртәнге сәғәт 10-дан көндөҙгө 3-кә тиклем "ВДНХ-Экспо" күргәҙмәләр комплексының беренсе ҡатында ВИЧ-инфекцияға аноним һәм бушлай тест үтергә мөмкин. Башҡортостан Республикаһының СПИД-ҡа һәм йоғошло ауырыуҙарға ҡаршы көрәш һәм иҫкәртеү үҙәгендә хәбәр итеүҙәренсә, һөҙөмтәләр 15 минуттан әҙер була. Мөрәжәғәт иткән һәр кемгә тейешле консультация бирелә.

✔Башҡортостанда быйыл күп фатирлы йортта дөйөм мөлкәтте капиталь ремонтлауға игәнә түләүгә сығымдарҙы компенсациялау тәртибе ҡабул ителде. Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, компенсация 70 йәшкә еткән, яңғыҙ йәки пенсия йәшендәге эшләмәүсе граждандарҙың ғаиләһендә йәшәгән торлаҡ хужаларына түләнәсәк. Компенсация алыу өсөн йәшәгән урын буйынса Республиканың халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү үҙәге филиалына мөрәжәғәт итергә кәрәк.

✔Республикала иң яҡшы йыл уҡытыусыһын һайлайҙар. Һөнәри оҫталыҡ бәйгеһендә республиканың иң яҡшы 140 уҡытыусыһы ҡатнаша. Улар араһында һигеҙ инглиз теле, дүрт башланғыс класс, дүрт информатика уҡытыусыһы бар. Конкурста математика, физкультура, рус теле һәм әҙәбиәте, география, татар теле һәм әҙәбиәте, музыка, башҡорт теле һәм әҙәбиәте, физика, тарих һәм йәмғиәтте өйрәнеү, химия уҡытыусылары ла ҡатнаша. Быйыл тәүге тапҡыр "Йәш уҡытыусы-2016" номинацияһы ҡаралған. Еңеүселәрҙең исеме 9 апрелдә Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында (Ленин урамы, 62) иғлан ителә. Көндөҙгө сәғәт 12-лә башлана.

✔9 апрелдә М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ла "Рәсәйҙең һәләтле балалары: алтын тауыштар" III Бөтә Рәсәй фестиваль-конкурсы ойошторола. Сарала Башҡортостан ҡалалары һәм райондарынан, Рязань өлкәһенән, Улан-Удэ, Уральск (Ҡаҙағстан) ҡалаларынан 750-нән ашыу баланың ҡатнашыуы көҙәлләна.

*ИҪКӘРТЕҮ*



# ТАШҠЫНДАР ҘА...
## фажиғәгә тарыта

**Баш ҡаланың һыу баҫыу ихтималлығы булған һәм һыу аҫтында ҡалған территорияларҙан эвакуацияланған халыҡты ваҡытлыса урынлаштырыу урындарында йәмәғәт тәртибен һаҡлау тәьмин ителәсәк.**

Шулай уҡ хоҡуҡ һаҡлау органдары эвакуация маршруттарында, граждандарҙы яҡлау саралары һәм көстәре хәрәкәте маршруттарында хәүефһеҙлек тәьмин итеүгә ҙур иғтибар бүлә, көрәк сәкта тәүлек әйләнәһенә дежурҙар ҡуя. Был мародерлыҡ, ҡарауһыҙ ҡалған йорттарҙа уғрылыҡ күренештәрен киҫәтеү һәм булдырмау маҡсатында эшләнелә.

Әле республика йылғаларында боҙ китә башланы. Бөгөнгә Ағиҙел йылғаһының кимәле 268 см, тәүлек эсендә ул 46 сантиметрға күтәрелгән; Ҡариҙелдә - 205 (55 см); Димдә - 215 (15 ) см.

Был осорҙа йылға буйҙарында бигерәк тә һаҡ булырға кәңәш ителә, сөнки боҙ китеүе үҙе бер тамаша, әммә ул ҙур фажиғәгә лә килтереүе мөмкин. Шуға күрә балаларға ғына түгел, ололарға ла йылғаға яҡын килмәскә, боҙ киткәндә уның өҫтөнә һикермәскә, боҙҙа, һалда, бүрәнәлә йөҙмәскә кәңәш ителә.

Шулай ҙа фажиғә шаһиты булған осраҡта, тәү сиратта нимә эшләргә кәрәклеген хәтерегеҙгә һалып ҡуйығыҙ: һыуға батҡан кешегә ҡысҡырығыҙ, ул үҙен яңғыҙ тип уйламаһын, был уға көс, ышаныс бирәсәк. Ярҙамға ташланғанда, терәк майҙанын киңәйтеү өсөн ниндәй ҙә булһа таҡтаға баҫығыҙ йәки ятығыҙ. Бәләгә тарыусыға 3-4 метрҙан таяҡ, таҡта, арҡан, шарф, ҡайыш йәки кейем ташлағыҙ. Бәләгә тарыусы уны эләктереп алыу менән уны ярға һөйрәгеҙ. Тартып сығарғас, елдән ышыҡлағыҙ, булған йылы кейемдәрегеҙҙе бирегеҙ. Ундай мөмкинлек юҡ икән, кейемдәрен систереп, ныҡ итеп һығып, ҡабаттан кейҙерегеҙ һәм полиэтиленға урағыҙ. Грелка, ҡайнар һыу тултырылған шешә йәки усаҡта йылытылған таштарҙы сепрәккә урап, күкрәк ситлегенең ҡабырға яҡтарына, башына, сатына ҡуйығыҙ. Тәнде ыумағыҙ! Һыуған ваҡытта һыуынған ҡан перифериялағы тамырҙарҙан тәндең урта өлөшөнә ағыла башлай һәм был температура төшөүгә килтереүе ихтимал. Мөмкинлек булғанда кешене йылы урынға индереп, ҡайнар сәй эсерегеҙ. Ләкин алкоголь эсерә күрмәгеҙ - бындай осраҡта ул үҙәк нервылар системаһына баҫым яһап, кеше үлергә лә мөмкин. Тәүге ярҙамды күрһәткәс, тиҙ ярҙам саҡыртығыҙ йәки үҙегеҙ медицина учреждениеһына алып барығыҙ.

Әгәр бәхетһеҙ осраҡ шаһиты булһағыҙ йәки үҙегеҙ бәләгә тарыһағыҙ, "Коткарыу хеҙмәте 112"-гә шылтыратығыҙ. Был номерға сим-картаһыҙ, аҡсаһыҙ, хатта телефонығыҙҙың клавиатураһы блокта торғанда ла шылтыратырға мөмкин.

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ХАЛЫҠ МЕНӘН...
## ошолай аралашыу оҡшай



**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов тура эфирҙа халыҡтың һорауҙарына яуап бирҙе. Быйыл журналистар менән аралашыу яңы форматта үтте һәм унда республиканың төп телеканалдары журналистары ҡатнашты, шулай уҡ Стәрлетамаҡ, Баймаҡ, Октябрьский, Күмертау, Нефтекама ҡалалары, Янғантау ҡасабаһындағы күсмә студиялар менән тура бәйләнештәр ойошторолдо. Һорауҙарҙы алдан бирергә мөмкин ине, уларҙың иҫәбе 10 меңдән ашып китте.**

Ысынлап та, республика халҡы Башҡортостан Башлығына һорау биреү мөмкинлегенә битараф ҡалманы. Тематик йәһәттән һорауҙарҙың 40 проценты юлдар, 17 проценты торлаҡ-коммуналь хужалығы, ҡалғандары торлаҡ төҙөлөшө, ауыл хужалығы, сәнәғәт үҫешенә, шулай уҡ спорт, эшһеҙлек, йәмәғәт транспорты, бушлай бүленгән ер участкалары проблемаларына ҡағылды. "Юл мәсьәләһе быйыл беҙҙең республикала ғына түгел, тотош илдә киҫкен тора. Сөнки ҡыш йылы булды. Был автомобиль юлына ҙур зыян килтерә. Әммә был аҡланырға тырышыу түгел. Мин бөтөн кимәлдәге власть юлдарҙың торошо өсөн халыҡтан ғәфү үтенергә тейеш, тип күптән әйтә киләм. Юл төҙөлөшөн контролдә тотоу, заманса технологиялар ҡулланыу буйынса ла саралар күрелергә тейеш", - тине юлдарҙың торошона ҡағылышлы һорауға яуап биреп Рөстәм Зәки улы.

Халыҡты яҙғы ташҡынға бәйле хәл дә борсой. Республика башлығы билдәләүенсә, әлегә һыу баҫыу ҡурҡынысы юҡ, шулай ҙа йылғаларҙа боҙ тығылыуы һөҙөмтәһендә, мәҫәлән, Саҡмағош районында бер ауылды һыу баҫыуы күҙәтелде. "Бөгөн һыу һаҡлағыстар ҡар иреүҙән барлыҡҡа килгән һыуҙы ҙур күләмдә ҡабул итеп, һыу ташыуҙы булдырмаҫҡа ярҙам итә. Әммә ямғырҙар йышайып, көндәр ҡапыл йылытыуы арҡаһында йылғаларҙа һыу кимәле күтәрелеүе ихтимал", - ти республика етәксеһе һәм быйыл республика ташҡын хәүефе алдында тороуын таныуын билдәләне һәм йылғалар буйында йәшәүселәрҙе һағыраҡ булырға саҡырҙы.

Баймаҡ районы халҡы исеменән Темәс ауыл биләмәһе башлығы Рауил Йәнсурин сығыш яһаны һәм бөгөнгө көрсөк шарттарында республиканың көньяғын социаль-иҡтисади яҡтан үҫтереү эше нисек дауам итәсәген белеште. Был төбәктә эре сәнәғәт предприятиелары юҡ, матди-техник база ла иҫкергән, шуға ла Урал арьяғы программаһы артабан ниндәй йүнәлештә эшләр икән, тип борсола баймаҡтар. "Мин әле генә Урал арьяғы райондарында булып ҡайттым. Был программа 2020 йылға тиклем оҙайтылған һәм мотлаҡ тормошҡа ашырыласаҡ. Яңы социаль, сәнәғәт объекттары төҙөү планлаштырыла. Шулай ҙа беҙҙең бурыс - кешеләрҙе үҙаллы эшләргә өйрәтеү. Бөгөн был райондарҙа бәләкәй эшҡыуарлыҡ яҡшы үҫешә, шуға ла беҙ уларға күберәк ярҙам итергә тырышабыҙ, белемдәрен камиллаштырырға мөмкинлек бирәбеҙ. Шуға ла тиҙҙән Урал арьяғының иҡтисади хәле яҡшырыр тип уйлайым". Әммә Рөстәм Зәки улы Урал арьяғы райондары халҡының ситкә күпләп китеүен дә һыҙыҡ өҫтөнә алды. Тыуым ҙур булған районлар - Баймаҡ, Әбйәлил, Ейәнсура, Хәйбулла райондары, хатта Сибай ҡалаһында күҙәтелә был хәл. "Әлбиттә, урбанизация процесы ла көсәйә, был тәбиғи. Республикала 40 процент халыҡ ауыл ерендә йәшәй, Рәсәйҙә - 25 процент. Әммә беҙгә хәҙер ауылдарҙа ла эш урындары булдырыу кәрәк. Шуға ла Урал арьяғын үҫтерәсәкбеҙ", - тине Р. Хәмитов. Балыса ошо төбәк балаларына юғары белем алырға мөмкинлек биргән Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты яҙмышына ла битараф түгел халыҡ. Бюджет урындарының һәм финанслау кәмеүе һөҙөмтәһендә был вуздың киләсәге хәүеф аҫтында, тип иҫәпләйҙәр улар. "Сибай институтында бер нисә мең кеше уҡый һәм ул беҙҙең өсөн кәрәк. Уның абруйы ла юғары, матди яҡтан да яҡшы үҫешә. Унда шундай яҡшы, йылы мөхит тыуҙырылған, шуға ла институт булһын өсөн бөтөн нәмәне лә эшләйәсәкбеҙ. Бюджет урындары, тимәк, студенттар ҡабул итеүҙең ҡыҫҡарыуы проблемаһы барлығын беләм. Шулай ҙа Сибай институты бөгөнгә көндә лицензияһын оҙайтты һәм артабан да уңышлы, сифатлы эшләйәсәк. Беҙ был мәсьәләлә ярҙам итәсәкбеҙ, республикаға ла, Урал арьяғы халҡына ла филиал кәрәк", тине Рөстәм Зәки улы.

Өфө ҡалаһы халҡы медицина ярҙамы, иҫке өйҙәрҙән күсеү буйынса һорауҙарына яуаптар алды. Дөйөм алғанда, Рөстәм Хәмитов Өфө ҡалаһы яҡшы яҡҡа үҙгәреүен билдәләне. Төҙөкләндерелгән үҙәк кеүек, ҡаланың бөтөн өлөштәре лә матур булырға тейеш, тине республика етәксеһе: "Бөгөн Өфөнөң Рәсәй ҡалалары араһында лайыҡлы урыны бар. Быйыл баш ҡалала июнь айында Рәсәй ҡалалары мәрҙәры форумы үтәсәк. Ҡунаҡтарға ла беҙҙең ҡалабыҙ оҡшар, тип ышанам". Шулай уҡ тиҙҙән Өфөлә Ленин майҙанында тағы бер яңы фонтан төҙөләсәк. Баш ҡала һәм Башҡортостан өсөн ҡыҙыҡлы проект - тарихи парк төҙөү планы ҡарала. Интерактив формала илдең, республиканың үткәнен һөйләүсе тарихи музей ВДНХ территорияһында урынлашасаҡ. Киләсәктә уның эргәһендә музейҙар комплексы барлыҡҡа килеүе лә ихтимал һәм ул ҡыҙыҡлы, заманса, тарихи, мәғәни, күңел асыу үҙәгенә әүереләсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Минең өсөн министрҙар һәм Хөкүмәт ағзалары алдына һалған отчеттарға ҡарағанда, республика халҡы менән ошо рәүешле аралашыу мөһимерәк, - тине Рөстәм Хәмитов осрашыу аҙағында. "Әле телгә алынмаған темалар күп булды, беҙгә сәнәғәт производствоһын үҫтереү, заводтар төҙөү, яңы эш урындары булдырыу мөһим. Миграция мәсьәләһе, уртаса ғүмер оҙайлығын, тыуымды күбәйтеү тураһында уйланырға кәрәк".**

**Ләйсән ДАЯНОВА**
**әҙерләне.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә һәр район өсөн юлдағы соҡорҙарҙы ямау графигы төҙөлгән. Ағымдағы йылдың апрель һәм май айҙарына төҙөлгән "юл картаһында" урамдар һәм эштәрҙе башҡарыу датаһы күрһәтелгән. Иҫкәрмәлә үҙгәрештәр булыу ихтималлығы хаҡында әйтелә. Ҡала ремонт эштәре менән 40 бригада шөғөлләнә. Баш ҡала юлдарында тәүлегенә уртаса 4000 самаһы етешһеҙлек бөтөрөлә. Ремонт төп һәм икенсел юлдарҙа алып барыла. Бөгөнгә юл хеҙмәттәре 48,8 мең квадрат метр юл япмаһында соҡорҙарҙы ямаған һәм 7,5 мең тонна самаһы асфальт-бетон ҡатнашмаһы түшәгән.

✓"Өфө-Арена"ла "Салауат Юлаев" командаһының баш тренеры Игорь Захаркин матбуғат конференцияһы уҙғарҙы. Ул миҙгелгә йомғаҡ яһаны. "Моғайын, киләһе миҙгелдә лә клубты етәкләрмен. Әле техник мәсьәләләр хәл ителә", - тине Игорь Захаркин. - Ә артабан уйнай алмауыбыҙҙың төп сәбәптәренең береһе - йәрәхәтләнгән уйынсыларҙың күп булыуы. 12 хоккейсы етди йәрәхәттәр менән уйнаны". Билдәләнеүенсә, миҙгел ябыу 10 апрелдә көндөҙгө сәғәт 1-ҙә башлана.

✓Өфөлә Башҡорт юниор КВН лигаһының финалы үтә. Сара 15 апрелдә "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһында ойоштороla. "Башҡорттар.ру" (Өфө), "Төньяҡ амурҙары" (Дыуан районы), "XX Централ" (Өфө), "Һарыҡты кем ашаған" (Ғафури районы), "Башstar" (Салауат районы), "Ритайым" (Күгәрсен районы), "ЖэКа" (Стәрлетамаҡ), "Тик ҡыҙҙар" (Учалы) командалары ҡатнаша.

✓Республикала "Стәрлебаш биҙәктәре" дебет шәл байрамы уҙҙы. Стәрлебаш районында ойоштороlған күргәҙмәгә оҫталар йөҙҙән ашыу эш килтерҙе. Байрам Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың художество һәм халыҡ ижадын үҫтереүгә арналған республика кәңәшмәһе йомғаҡтары буйынса тәҡдимен үтәү сиктәрендә уҙғарылды.

✓Башҡорт дәүләт филармонияһында "Урал ауазы" III Халыҡ-ара оркестрҙар һәм халыҡ уйын ҡоралдары ансамблдәре конкурс-фестивале тамамланды. Абруйлы жюри ағзалары әйтеүенсә, Башҡортостанда үткән фестиваль-конкурс үҫеннең йүнәлеше буйынса илдә берҙән-бер. Халыҡ сәнғәте байрамына әүерелгән фестивалдең гала-концертында Гран-приға эйә булыусы, лауреаттар һәм дипломанттар иғлан ителде. Быйыл конкурста Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән һәм сит илдәрҙән: Ҡаҙағстандан, Белоруссиянан, Әзербайжандан 30 коллектив ҡатнашты.

*✔ Бөгөн уҡыусыларҙың башҡорт теле һәм әҙәбиәтен маҡсатлы өйрәнеүен тәьмин итеү мөһим. Әгәр ҙә туған тел буйынса Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырыусыға техник вузға ингәндә өҫтәмә балл иҫәпләнһә, моратҡа ирешер инек.*



АФАРИН!



# ЗАМАНСА УҠЫТ...

## әммә телебеҙгә һөйөү тәрбиәлә!

(Башы 1-се биттә).

Түңәрәк ҡорҙа һөйләшеүҙәр барышында "Башҡортостан республикаһы һәм Рәсәй Федерацияһы мәғарифы тураһындағы закондарҙың башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыуға йоғонтоһо" тигән дөйөм тема тәҡдим итеп, уҡытыусыларҙың шәхси фекерҙәрен тыңланыҡ. Улар был закондарға таянып эшләүҙән тыш, киләсәкте алдан күрә белеүҙәрен, алдынғы ҡарашлы булыуҙарын да иҫбатланы", - тине Луиза Хәмзә ҡыҙы. Йәғни, конкурста ҡатнашыусылар алдына һуңғы йылдарҙа төрлө кимәлдәге конференцияларҙа күтәрелгән башҡорт телен уҡытыуға ҡағылышлы актуаль һорауҙарға яуап эҙләү бурысы ҡуйылған. Ошондай һөйләшеүҙәрҙең һығымталары тураһында быйылғы конкурстың абсолют еңеүсеһе титулына лайыҡ булыусы Ишембай районының Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернаты уҡытыусыһы Фаягөл Әмирханова шулай тине:

- Түңәрәк ҡор артында һөйләшеүҙәрҙә Федераль белем биреү стандарттары тураһында бик етди фекер алышыу булды. Мәктәптә башҡорт телен уҡытыуға яңы стандарттарҙың файҙалы йә зыянлы йоғонтоһон һәр кем үҙенсә баһаланы. Әммә ултырыштың аҙағында бөтәбеҙ ҙә бер фекергә килеп, һығымта яһап ҡуя алдыҡ. Беҙҙең төп бурысыбыҙ - туған тел аша балаларҙы башҡорт рухлы итеп үҫтерергә булышлыҡ итеү. Закондарҙағы үҙгәрештәр сиктәрендә ошо маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыу юлдарын эҙләргә кәрәк, тип билдәләнек. Конкурсҡа килгән коллегаларым был юҫыҡта ҡулдарынан килгәнсе эшләй. Башҡа предмет уҡытыусыларынан электрон белем биреү йәһәтенән дә артта ҡалмайбыҙ. Әммә бөгөн беҙгә уҡыусыларҙың башҡорт теле һәм әҙәбиәтен маҡсатлы өйрәнеүен тәьмин итеү мөһим. Әгәр ҙә туған тел буйынса Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырыусыға техник вузға ингәндә өҫтәмә балл иҫәпләнһә, моратҡа ирешер инек. Сөнки беҙҙең гимназия уҡыусылары йыл да үҙ теләге менән башҡорт теле буйынса БДИ тапшыра килә. Бының сере ябай - балаға рухи тәрбиә бирелә һәм ул күңеле ҡушҡанса эшләй...

"Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурсында Фаягөл Тимербай ҡыҙы кеүек утыҙ йыл хеҙмәт стажы булған уҡытыусылар менән бергә йәш белгестәр ҙә ҡатнашты. Был конкурсты быуындар араһында тәжрибә уртаҡлашыуға булышлыҡ иткән сараға әйләндерҙе. Стәрлетамаҡ ҡалаһының 12-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе уҡытыусыһы Рим Ғәббәсов "Иң яҡшы педагогик инициатива" номинацияһын алды. Егерме бер йыл хеҙмәт стажы булған уҡытыусы һаман да коллегаларының эшенән фәһем алыуы тураһында белдерҙе. Уны бигерәк тә электрон белем биреүгә бәйле проекттар ҡыҙыҡһындырған. "Педагогиканың өмөтлө киләсәге" номинацияһында еңеүсе Өфө ҡалаһының 114-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе уҡытыусыһы Яҙгөл Сирбаева: "Мин осталыҡ дәресендә "Федераль белем биреү стандарттары шарттарында этномәҙәниәт компетентлыҡтарын формалаштырыу" тигән тема буйынса сығыш яһаным. Башҡа конкурсанттарҙы тыңлап, фекер алышыуҙарҙа ҡатнашҡандан һуң, яңыса белем биргәндә лә халыҡтың тарихын, йолаларын, мәҙәниәтен хәтерҙән сығармаҫҡа кәрәк, тигән фекер нығынды. Киләсәктә башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә генә түгел, үҙем етәкләгән "Тыуған яҡты өйрәнеү" түңәрәгендә лә уҡыусыларға ошо маҡсатҡа ярашлы белем бирәсәкмен", - тине.

Артабан төрлө милләт балалары уҡыған мәктәптәрҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытҡан педагогтар балаларҙы дәрескә ылыҡтырыу серҙәре менән бүлеште. Өфө ҡалаһының 94-се лицейы уҡытыусыһы Әлимә Салауатова башҡа милләт балаларында башҡорт теленә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу өсөн уҡытыусының белем даирәһе киң булырға һәм ул һәр төрлө йәмғәт эштәрендә лә әүҙемлек күрһәтергә, ата-әсәләр менән тығыҙ бәйләнештә эшләргә тейеш, тине. Әйткәндәй, Әлимә Салауатова һәм Нефтекама ҡалаһының 12-се урта дөйөм белем биреү мәктәбенән Элиза Шәрәфетдинова, Янаул ҡалаһының 1-се урта дөйөм белем биреү мәктәбенән Әлфиә Фаршатова, Учалы районы Мулдаҡай ауылы урта дөйөм биреү мәктәбенән Зөлфиә Әминева быйылғы конкурстың лауреаттары исеменә лайыҡ булды.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ДОНЪЯ ШАУҠЫМЫ

# ТАҒЫ БЕР ҠЫҘЫУ НӨКТӘ




**Ерҙә тормош яралғандан алып кешелек күпме ваҡытын тыныслыҡта үткәргән икәнлеге тураһында уйланғанығыҙ бармы? Бөгөнгө ҡан ҡойоштар барған төбәктәрҙең көндән-көн артыуына ҡарап, был һандың бик бәләкәй булыуын тойомларға була. Мәҫәлән, 1945 йылдан һуң, йәғни 71 йыл эсендә ер йөҙөндә ни бары 26 (!) ғына көн һуғыш булмаған икәне билдәле. Әлеге мәлдә лә планетаның теге йәки был урынында хәрби бәрелештәр ҡубып, меңәрләгән кешенең ғүмере ҡыйыла, әллә күпмеһе тыуған йортон ҡалдырып, тынысыраҡ яҡтарға ҡасырға мәжбүр. Донбасс, Сирия, Ливия, Афғанстан, Ираҡ - был төбәктәрҙән килгән хәбәрҙәрҙә "терракт", "ҡырылыш", "һуғыш", "боевик" һүҙҙәренең йыш ишетелеүенә күнегеп тә барабыҙ, буғай.**

Ағымдағы йылдың 2 апрель төнө ер шары йөҙөндә тағы ла бер ҡыҙыу нөктә барлыҡҡа килеүе менән хәтерҙә ҡаласаҡ. Дөрөҫөн әйткәндә, әлеге бәрелеш Әрмәнстан менән Әзербайжандың Таулы Карабах биләмәһендәге бер-береһенә ҡаршы хәрби көс ҡулланыуының беренсеһе түгел. Әллә күпме кешенең ғүмерен өҙгән был апрель төнөндә ике ил етәкселәге автомат ҡына түгел, ә реактив снарядтар һәм күп зарядлы механизмды эшләтеп ебәреүсе ҡоролмаларҙан торған РСЗО-ны (Реактивная система залпового огня), миномет, артиллерия ҡоролмалары, танк һәм армия авиацияһын да эшкә "екте". Һәм, күнегелгәнсә, Баҡы менән Ереван был бәрелештең башланғысында ҡаршы яҡ ил тороуы тураһында тамаҡ ярып ҡысҡырҙы.

Шуныһы ҡыҙыҡ, Таулы Карабах тирәһендә ҡалҡҡан конфликтты йәйлау тураһындағы һөйләшеүҙәр даими алып барыла, ләкин ниндәй ҙә булһа аныҡ һығымтаға килеү ысулы табылмай. Был осраҡта, ә ҡайҙа һуң быуаттар буйы данланған һәм маҡталған Кавказ аҡылы, тигән һорау тыуа. Ни өсөн туғандаш ике халыҡ оҙаҡ ваҡыт ике яҡты ла ҡәнәғәтләндергән ҡарарға килә алмай? Сөнки кемгәләр был хәрби солғаныштың туҡтамауы тик файҙаға ғына. Шуға күрә, инде тымам тигән ерҙә һуғыш ялҡыны әленән-әле ҡабынып ҡына тора. Ә "куклавод"тарҙың кем икәне хаҡында тәфсирләп һөйләп тороу кәрәкмәй ҙә, сөнки улар барыһына ла билдәле. Һәм, әлбиттә, был осраҡта ла Рәсәйҙе алып килеп ҡыҫтырыу, бөтә буталыш тик уға ғына файҙалы икәнен иҫбатларға тырышыусы ҡоҙғондарҙың ныҡыраҡ ҡарҡылдай башлауына аптырайһы түгел. Тик Рәсәйгә был кәрәкме? Үҙенең биләмәһенә лә таралыу хәүефе янаған ҡан ҡойошто башлау, меңәрләгән ҡасаҡтарға илгә килеп тулыу мөмкинлеге биргән, иҡтисади-сауҙа мөнәсәбәттәренә ҡамасаулаусы ҡыҙыу нөктәләр менән үҙен уратып алыу өсөн ни тиклем үҙ илендә яратмаҫҡа мөмкин һуң? Күҙ алдына килтереп булмай.

Ваҡытында ике ил араһындағы конфликттың СССР-ҙы тарҡатыу, илдәге хәл-тороштоң тотороҡлоғон юҡҡа сығарыу өсөн ҡулланылған бер сара булыуын оноторға ярамай. Күпме йылдар үтһә лә, был алымды ҡулланыу дауам итә. Был "тамашаның" сценарий яҙыусыһы һәм режиссеры теләгән ваҡыттарында конфликтты тағы ла ҡуйыртасаҡ, ике илде маңлайға маңлай терәп, бөтә Кавказ биләмәһендә сыуалыш барлыҡҡа килтерәсәк. Шуға күрә әлегә быҫҡып ҡына янған усаҡтың ҡасан дөрләп китеүен алдан билдәләүе ауыр. Шуныһы ҡурҡыныс.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡар һыуы

❖ Ҡар һыуы йөрәк сирен кәметеүгә, йөрәк ҡан тамырҙарындағы ойошҡан ҡанды аҡрынлап таратыуға булышлыҡ итә. Геморрой ваҡытында ҡан китеүҙе туҡтатырға ярҙам итә, холестеринды кәметә.

❖ Ҡар һыуын иртәнсәк, ашарҙан алда эсәләр. Ҡыш көнө һыуҙы тышта туңдырып, шунан өйгә индереп иретеп ҡулланалар. Йәйгеһен туңдырғыста туңдырырға була. Һыуһаған саҡта сәй, ҡәһүә урынына гел генә һалҡынса шишмә һыуы йәки боҙҙо иретеп яһалған һыуҙы эсегеҙ. Һыу йылы түгел, һалҡынса булһын.

### Үләнле ванна

❖ Бер ус аҡ сәскә (ромашка), шалфей, йүкә сәскәһе, бөтнөк (мята) япрағы алына. Үләндәргә һыу ҡойоп, һүрән утта тотҡас, ваннаға һалып йыуынырға.

### Тәмәкеселәргә кәңәш

❖ Диңгеҙ балығы тәмәке тәьҫирен кәметә, ҡан тамырҙарында тромбтар барлыҡҡа килеүҙе тотҡарлай. Тәмәкесегә С витамины күберәк ашарға кәрәк, сөнки ул ҡан составына ла, ҡан тамырҙарына ла ыңғай йоғонто яһай.

### Ангина

❖ Бер стаканға ҡырылған сей сөгөлдөр, 7 ҡалаҡ һеркә һалып, бер аҙ тотоғоҙ. Бүленеп сыҡҡан һутты һығып алырға һәм шуның менән тамаҡты сайҡатырға, аҙ ғына йотоп ебәрһәң дә була. Ангина оҙаҡҡа бармаҫ, ҡабат йонсотмаҫ та.

### Оҫҡолоҡтан

❖ Оҫҡолоҡ тотһа (сиҡаҡлатһа), шәкәр һурырға кәрәк. Кемгәләр көнбағыш килешә.

### Аллергия

❖ 2 ҡалаҡ һуҡыр кесерткәнде ярты литр ҡайнар һыуға һалып, термоста 1-2 сәғәт төнәтергә, һөҙөп, аллергик тимгелдәр булғанда, ҡан таҙартыу өсөн дә көнөнә 4-5 мәртәбә ярты шар стакан эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# ҠАРҒА БУТҠАҺЫ

**"Ҡарға бутҡаһы" үткәрерҙән өс-дүрт көн алда, ауылдаң иң егәрле, сәсән телле, абруйлы дүрт өлкән әбейе өй һайын йөрөп, байрам буласағын хәбәр итә.**

*- Ҡарға әйтә: "Ҡар, ҡар,*
*Туйым етте, - бар, бар,*
*Ярма, күкәй алып бар,*
*Һөт-майыңды һалып бар,*
*Икмәк-тоҙоң тотоп бар,*
*Сәй-шәкәрең һалып бар,*
*Йылы түшәк ҡыҫтырып,*
*Үҙең ҡупшы кейенеп,*
*Бала-сағаң эйәртеп,*
*Ҡасимосҡан биткә бар".*

Был ауылда ҡарға бутҡаһын Ҡасимосҡан тигән тау битләүендә үткәргәндәр.

Ҡатындар йыйыла башлайҙар: йомортҡа, сәй-шәкәр, һөт-ҡатыҡ әҙерләнә, килелә бойҙай, арпа, тары ярмаһы төйөлә. Шул уҡ ваҡытта үҙҙәре байрамға кейә торған кейемдәрен дә кейәләр.

Байрам көндө һәммәһе лә билдәләнгән урынға йыйыла. Балитәкле күлдәктәр, камзулдар кейгән, ҡашмауҙар таҡҡан әбейҙәр, ҡатын-ҡыҙҙар йыйылып бөткәс, байрамды алып барыусы һайлана. Уны беҙҙә юлбарсы тип йөрөтәләр. Юлбарсы үҙенә айырым кейенә - сыбар күлдәк, еңһеҙ камзул, арҡаһында көмөш тәңкәләр тегелгән ҡыҙыл яулыҡ, башында осло башлыҡ. Уның әйткәндәрен һәр кем тыңлай. Байрамға саҡырып йөрөүсе әлеге дүрт әбей һәр кемдән ярмаларҙы йыйып ала, ҡара ҡаҙандар аҫып, бутҡа бешерә башлайҙар. Юлбарсы әбей бөтәһен дә байрам менән ҡотлай:

- Бына тағы имен-аман ҡара ергә баҫтыҡ, донъялар имен торһон, уңыштар уңһын. Бөтәгеҙ ҙә ихлас күңелегеҙҙе биреп байрамда ҡатнашығыҙ, йырлағыҙ, бейегеҙ, уйнағыҙ ҙа көлөгөҙ! Әммә яҡын-тирәгә ир-егет килә күрмәһен, һаҡ йөрөгөҙ, юғиһә байрамдың ҡәҙере китер, - тип һүҙен бөтөрә. Шунан башлана уйындар, йырбейеүҙәр. Бер урында "Күмер йөҙөк", икенсе урында "Йәшерәм яулыҡ" һ.б. уйындар уйнайҙар.

Күп тә тормай, бутҡа бешкәнен белдереп, әбейҙәр һөрән һала. Өйкөм-өйкөм булып бер нисә табын ҡорола. Һәр табында - бер табаҡ бутҡа. Аш янында әбейҙәр үҙҙәренең йәш ваҡыттарын иҫкә ала, ҡыҙҙарға аҡыл өйрәтә, кәңәштәр бирәләр. Ашап туйғас, ҡалған ашты ҡарғаларға һалалар: "Ҡалған ашты ҡарғалар ашаһын, ҡарғалар туйһын, иген уңһын", - тиҙәр ҙә бутҡаны ағас төптәренә, таштарға һалып сығалар.

*Бутыр-бутыр бутҡа бешә,*
*Уртаһына май төшә,*
*Бутҡа бешергән ҡортҡаның*
*Фатихаһы мул төшә,* - тип тә һамаҡлағандар.

Ҡарғаларҙы саҡырғанда: "Ашағыҙ, туйынығыҙ, илгә именлек килтерегеҙ!" йәки:

*- Бер бөртөккә ун бөртөк,*
*Ун бөртөккә - мең бөртөк,* - тип һамаҡлайҙар.

Һуңынан ҡара ҡаҙандарҙы, суйын-ҡомғандарҙы һыуға һалалар. Шулай итһәң, ямғыр яуа тиҙәр ине. Ямғыр теләп, былай тип һамаҡлайҙар:

*- Ҡабыр-ҡабыр, ҡабырсаҡ,*
*Ҡабыр төбө - кимерсәк.*
*Ашлыҡтар сәселгән саҡ,*
*Ямғыр яуып үтер саҡ.*
*Яу, яу, ямғырым,*
*Һимеҙ тәкә һуйырмын...*

Байрамды башлап йөрөүсе юлбарсы, һүҙен йомғаҡлап, былай ти: "Киләһе йылда ла илдә именлек, ерҙә һиллек булып һаулыҡта йәнә осрашырға яҙһын!"

**"Башҡорт халыҡ ижады"нан.**
**(Дауамы бар).**

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

# АҪАЛЫ БАЛАҪТАР ҘА...

## аҫыл рухыбыҙҙы һаҡлай

**Донъяла глобалләшеү көсәйгән һайын, халыҡтарҙың үҙ тамырҙарын барлау, милли асылына төшөнөү ынтылышы көсәйә бара, тип юҡҡа әйтмәйҙәр икән. Башҡорттоң быуаттар дауамында һаҡлап ҡала ҡалған мәҙәниәтенең тағы бер гүзәл өлгөһөнә тамаша ҡылырға насип булды ошо көндәрҙә - БР Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге Әлшәй районында "Быуаттарҙы бәйләүсе еп" Республика башҡорт балаҫы оҫталары фестивале үткәрҙе. Быйыл унда Әлшәй, Миәкә, Дәүләкән, Архангел, Ғафури, Ҡырмыҫҡалы, Асҡын, Шишмә, Бишбүләк, Благовар, Баймаҡ, Учалы районларынан, Бөрө ҡалаһынан балаҫ һуғыусылар ҡатнашты.**





Дим-Өршәк буйы башҡорттарының төп кәсептәренең береһе ул - аҫалы балаҫ һуғыу эше. Ике йылға бер үткәрелә килгән был фестивалдең оло ҡаҙаныштарының береһе шулдыр - балаҫ һығыу эшенә яйлап башҡа районлар ҙа ҡушыла, быны фестивалдә ҡатнашыусы төбәктәрҙең төрләнә барыуында күрергә була. Шулай ҙа халҡыбыҙҙың ырыуҙарға бүленеү үҙенсәлеге лә бар. Йәғни, билдәле бер этник төркөмдөң үҙен танытып торған үҙенә генә хас биҙәктәре, үҙенә генә хас кәсеп-шөғөлө булыуын иҫәпкә алғанда, аҫалы балаҫтың һәр төҫө, һәр орнаменты уның Дим буйы башҡортоноҡо икәнен һөйләй. Шуға ла быйылғы фестиваль күргәҙмәһенә тамаша ҡылыусылар төҫтәре, биҙәктәре буйынса айырым районларҙың, уларҙың эшенә ниндәй милләттең йоғонтоһо күберәк икәнен тойомлай алғандыр.

Биҙәк - юҡтан бар булмаған, уның үҙенең аңлатҡан мәғәнәһе, хатта ниндәйҙер йөкләмәһе бар. Шуға ла киләсәктә биҙәктәрҙе боҙмау маҡсатында уларҙың тарихын өйрәнеү эше лә яйға һалыныр, тигән өмөттәбеҙ. Дәүләкән районынан килгән һәм үҙе лә ҡасандыр был фестивалдең еңеүсеһе, быйыл иһә баһалама ағзаһы булған Назиә Әхмәтвәлиева әйтеүенсә, асыҡ һәм ябыҡ баҙыян, бөтөй, айсыҡ, батмус аҫа, сулпы аҫа, әҙрәс, ҡаҙ тешләтеү, тәкә мөгөҙө - иң боронғо аҫалар иҫәпләнә. Назиә Фазлый ҡыҙы күргәҙмәләге ҡайһы бер эштәрҙә төҫтәрҙең дөрөҫ ҡулланылмауын да билдәләне. Сағыу булһын, тип, ҡайһы оҫталар кибеттәрҙә һатылған еп ҡуллана, әммә көнкүрештә ҡулланылған әйбер, шул уҡ балаҫ артыҡ сағыу төҫтә булһа, күҙҙе арыта.

Әлшәй районы Иҙрис ауылынан 75 йәшлек Сәүиә Иманғол ҡыҙы Муллағәлиева ла бөгөнгө көндә аҫалы балаҫтарҙың биҙәге ябайлаша барыуына хәүефләнеүен белдерҙе. "Шау сәскәнән генә торған балаҫты һуғыуы еңелерәк, хәҙер шуға өҫтөнлөк бирәләр. Элек йөндө иләп, ҡаҙанға ут яғып, һәр төҫкә айырым мана инек. Буяуы сығып тормаһын өсөн тоҙ, ҡатыҡ йәки эркет һыуы өҫтәйһең. Шунан ниндәй төҫкә ниндәйе килешә, шуныһын ҡарап, ҡатмарлы аҫа биҙәктәрен тура килтереп һуғаһың. Аҫалы балаҫты ҡәҙерлегә генә, матурлыҡ өсөн тотаһың, һәр өйҙә сепрәк балаҫ ҡулланыла. Йөндән һуғылғаны бирнәгә тип әҙерләнә ине йышыраҡ. Тарманы талҡып, киптереп, төйөп, иләп эшләнгән ептән таҫтамал да, ашъяулыҡ та һуға торғайныҡ. Бар кешелә шундай сүпләм таҫтамал булды".

Ысынлап та, йола - милли мәҙәниәтте генә түгел, халыҡты һаҡлаусы ла икәненә тағы бер инанаһың ошондай байрамдарҙа. Ана шул йола үтәү өсөн ҡуланылғанға күрә лә, аҫалы балаҫ бөгөнгө көнгә тиклем һаҡланғандыр ҙа. Әлшәйҙән 96 йәшлек Нәсихә Сиражетдинова 80 йәшенә тиклем һуҡҡан балаҫты.

- Элек бөтөн Стәрле халҡы беҙҙең балаҫтарҙы келәм итеп элде өйөнә. Ҡыҙҙың бирнәһендә лә балаҫ булыуы мотлаҡ. Өй ҡотлап алып барһаң да дан бер бүләк инде. Бер балаҫ һуғыу өсөн бер аҙна ваҡыт кәрәк, әле лә һуға алыр инем дә, аяҡ ауырта шул", - тип шаяртһа ла, был эш байтаҡ көстө ала икәне былай ҙа аңлашыла. Әммә ауырлығына ҡарамайынса, был төбәк һаман да ҡыҙҙарын аҫалы балаҫ менән оҙата бөгөн дә. Нәсихә Мырҙағәли ҡыҙының ҡыҙҙары Зөлфиә менән Зәкирә лә ҡатнашты күргәҙмә эшендә. Улар ҙа ҡул көсө, күҙ нуры түгелгән башҡорт балаҫын килем алыр өсөн түгел, ә йола үтәү өсөн һуғыуҙарын әйтте.

Өләсәйҙәре, әсәйҙәренән күреп, ҡыҙ балалар был эшкә бала саҡтан уҡ тотонһалар ҙа, Әлшәй уҡыусылар һәм пионерҙар йортонда балаҫ һуғыу түңәрәге лә эшләп килә. Өйрәтеүсеһе табылһа, мәктәптәрҙә лә уның филиалдары асыла. Мәҫәлән, күргәҙмәлә Сурай мәктәбенең балаҫ һуғыу түңәрәге етәксеһе Лариса Усманова ҡатнашты. Ҡәйнәмдән өйрәнгән һөнәремде 12 йәшлек ҡыҙыма ла, уҡыусыларыма ла өйрәтәм, ти ул. Әлеге мәлдә түңәрәктә 16 кеше ҡатнаша. Тик станоктарҙың етерлек булмауы эште бер аҙ ҡатмарлаштыра. Ауылда балаҫ һуғыу станогының төп өлөштәре - ҡылыс менән көрө бәйләүселәр ҙә бар икән, тимәк, әлшәйҙәр алдында хәҙер станоктар эшләү эшен тергеҙеү тора. Әйткәндәй, Архангел районы Орловка мәҙәниәт йорто етәксеһе, үҙҙәрендә лә, Әлшәйҙә лә оҫталыҡ дәрестәре үткәреп йөрөүсе Фәнисә Сәйфетдинова әйтеүенсә, балаҫ һуғыу станоктары ла бер-береһенән айырыла икән. Ул үҙе урыҫ станогында башлап эшләп өйрәнгән, унда башлыса буй балаҫ һуғалар. "Әлшәй яҡтары, Ғафуриҙар башҡорт станогында һуға. Аҫалы балаҫ һуғыуы ауыр түгел, әммә унда төҫтәрҙе эске тойомлау менән ҡуллана белергә кәрәк", - ти Фәнисә Фәрит ҡыҙы.

Өфөнөң һаңғырау балалар өсөн 6-сы балалар баҡсаһы етәксеһе Фатима Мәхмүтйән ҡыҙы Күскилдина ла үҙ тәрбиәләнеүселәрен алып килгәйне Әлшәйҙәге күргәҙмәгә. Улар ҙа оҫталыҡ дәрестәрендә балаҫ һуғыу эшен үҙләштерҙе.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Аҫалы балаҫ - башҡортто башҡаларҙан айырып, башҡаларҙан бер башҡа күтәреп торор рухиәт өлгөһө ул. Аҫалы балаҫ сәнғәтен өйрәнергә, серен асырға кәрәк әле беҙгә, сөнки унда ата-бабаларыбыҙҙың донъяны күҙаллауҙары ла, матурлыҡты нисек аңлауы ла ярылып ята. Шуға ла был фестивалдең әһәмиәтен баһалап бөтөп тә булмай. Бик ваҡытлы башланы был эште ихлас әлшәйҙәр. Башҡорт халҡының сәнғәт әйберҙәренең зауығы һәр заманға ла тап килә, тиһәләр ҙә, иң боронғо сәнғәт төрө булараҡ, аҫалы балаҫтың тарихи-этник үҙенсәлеген иҫтә тотоу мотлаҡ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

ХӘТЕРКИТАП



**Башҡортостандың гуманитар фәне арыу ғына өйрәнелеүгә ҡарамаҫтан, эшмәкәрлектәренә етерлек иғтибар бирелмәгән ғалимдарҙың исемдәре лә килеп сыға. Шундайҙарҙың береһе - тамырҙары Ырымбур губернаһының Күбәләк-Теләү олоҫо Ҡобағош ауылынан (хәҙерге Учалы районы) булған ғалим Мәжит Мәсәғүт улы Биләлов.**

# ТАҒЫ БЕР ИСЕМ,

## йәғни Мәжит Биләлов эшмәкәрлеге тураһында

Ул традицион мосолман белеме ала. Күрәһең, 1914 йылда асылған Верхнеуральск мосолман уҡыу йортонда уҡығандыр. Мөғәллимдәренең береһе рус һәм туған теленән башҡа бик күп көнсығыш телдәрен белгән атаһы Мәсғүт Биләлов була. Уның 1905 йылдың 10-15 апрелендә мосолмандарҙың рухи эшмәкәрлеге буйынса положение проектын эшләү кәңәшмәһендә ҡатнашыуы ла билдәле.

Артабан Мәжит Биләлов Көнсығышты өйрәнеү Мәскәү институтында белем ала, һуңынан Көнсығышты өйрәнеү буйынса Мәскәү комитеты аспиранты булып китә. 1924 йылда "Башҡорт теленең ғилми грамматикаһы" эшен яҙа, ул Башнаркомпростың академик үҙәгенең редакция комиссияһы тарафынан нәшер ителеүгә тикшереү үтә. Бер нисә йыл Мәскәүҙә Үҙәк нәшриәттең Башҡорт секцияһында эшләй. Н.К. Дмитриев фекеренсә, тап ошо учреждениела эшләү дәүерендә ул "башҡорт әҙәби телен булдырыу буйынса көрәшкә тотона". Мәжит Биләлов 1926 йылда Баҡы ҡалаһында уҙған Беренсе Бөтә Союз төркиәтселәр съезында Өфөнән ҡатнашҡан биш делегаттың береһе була. Йәш ғалимдың исеме сығыш яһаусылар һәм фекер алышыуҙарҙа ҡатнашыусылар исемлегендә күренмәй, шулай ҙа ул уҡыу йылдарында, ғилми-тикшеренеү эштәре ваҡытында туплаған тәжрибәһен, съезда тыңлаған теорияларын артабанғы эшмәкәрлегендә ҡулланған, тип ныҡлы ышаныс менән әйтергә була.

1927 йылда Башнаркомпрос СССР халыҡтары институты студенты М. Биләловты РСФСР Наркомпросының милли аҙсылыҡ үҙәк советы ултырыштарында ҡатнашыу өсөн үҙенең вәкиле итеп тәғәйенләй. Уға ултырыштарҙа ҡатнашыу, ултырыш протоколдарын һәм башҡа методик материалдарҙы алмашыу аша даими мәғлүмәт биреп тороу бурысы йөкмәтелә.

1928 йылда "Фәндәр академияһының Азия музейы ҡарамағындағы көнсығышты өйрәнеүселәр коллегияһы яҙмалары"нда М. Биләловтың Н.К. Дмитриевтың баш һүҙе аҫтында "Башҡорт теленең фонетикаһы буйынса таблицалар" хеҙмәте баҫыла. Билдәле төркиәтсе йәш ғалимдың хеҙмәтенә түбәндәге баһаны бирә: "М. Биләловтың фактик материалды тәрән еткерә белеүе уйҙырма-ғилми дөйөмләштереү һәм субъектив синтездан һаҡлауҙы яҡшы гарантия булып тора. Объектив аналитик материал булараҡ, М. Биләловтың эше кәрәк урында сағыштырыу ысулына һылтанып, быға тиклем булған авторҙарҙың буталсыҡ положениеларын аңлата, өҫтәмә керетә һәм теоретик положениеларҙы яңы миҫалдар менән нығытып, бик күп яңылыҡ индерә".

1928-1929 йылдарҙа Н. К. Дмитриев етәкселегендә СССР Фәндәр академияһы Башҡорт экспедицияһының лингвистик-фольклор подотряды тарафынан башҡорт телен һәм фольклорын тикшереү уҙғарыла. Сара БАССР Наркомзем тарафынан финанслана һәм 1930 йылдың 20 мартында СССР Фәндәр академияһының Башҡорт комиссияһы Башҡортостан Наркомпросына тикшеренеүҙәрҙе дауам итеү өсөн финанс ярҙамы һорап мөрәжәғәт итә. Хатта башҡорт телен өйрәнеү буйынса аныҡ ғилми-ғәмәли бурыстар билдәләнә:

- Башҡорт теленә мәктәптә уҡытыу, әҙәби тел һәм башҡорт телендә терминология булдырыу өсөн характеристика бирергә;
- Башҡорт теленең татар теле менән аныҡ сиген булдырырға;
- Башҡорт теленә рус теленән һәм фин-угыр телдәренән алынған һүҙҙәрҙе асыҡларға;
- Башҡорт теленең социологик дифференциация дәлилдәрен булдырырға (малсыларҙың һәм ер эшкәртеүселәрҙең һөйләшендәге айырмалыҡтар, ҡарттарҙың, балаларҙың, ҡатын-ҡыҙҙарҙың һ.б. телмәр үҙенсәлектәре);
- Башҡорт теле тарихының төп этаптарын билдәләргә;
- Башҡорт теленең диалектологик картаһын төҙөргә;
- Башҡорт теленең башҡа төрки телдәренә һәм төрки булмаған телдәргә мөнәсәбәтен билдәләргә;
- Башҡорт телен өйрәнеү өсөн матди база табырға (ҡульяҙмалар, эпиграфик һәйкәлдәр һ.б.);
- Фонетик транскрипция аша яҙып алып, фольклор өлгөләрен йыйырға;
- Башҡорт телен уҡытыу мәсьәләләре буйынса урындағы башҡорт хеҙмәткәрҙәре өсөн лекциялар һәм докладтар уҡырға;
- Ошо маҡсаттан материал йыйыу буйынса яҡынса программалар һәм инструкциялар сығарырға;
- Башҡорт теле һәм фольклоры буйынса ғилми хеҙмәттәр баҫтырырға.

**Әхәт СӘЛИХОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**
**(Дауамы бар).**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ҮГЕҘ ТИРЕҺЕ ҘУРЛЫҠ ЕР

**Фольклорсылар һәм этнографтар тарафынан башҡорт йәмғиәтендә ер үлсәүҙең ҡыҙыҡлы ғына күренештәре билдәләнгән. Шуларҙың береһен ҡарап үтәйек.**

Бер риүәйәттә күсеп килеүселәр башҡорттарҙан үгеҙ тиреһе ҙурлыҡ ер һорай. Уйлап ҡараһаң, иң ҙур үгеҙ ҙурлыҡ ер ҙә "бер аяҡ менән баҫып торорлоҡ" ҡына бит. Әммә эш уйлай ғына булып сыҡмай. Ситтән килеүселәр үгеҙҙе һуйып, тиреһен нәҙек кенә таҫмаларға ҡырҡып, шуларҙы тоташтырып, ҙур ғына майҙанды уратып ала.

Ерҙе былай итеп киҫелгән үгеҙ тиреһе менән үлсәү йолаһы сал тарихҡа барып тоташа икән. Был хәл, мәҫәлән, боронғо карфагендарҙа теркәлгән. Карфаген ҡалаһының барлыҡҡа килеү эпизодында, был ҡала үгеҙ тиреһенән теленгән нәҙек кенә ҡайыштар менән ҡамалған булған, тиелә.

Ошоға оҡшаш сюжет Л.С. Толстова тарафынан XX быуат төркмәндәре тураһында Хивала яҙылған. Был риүәйәттә Хазират Полван-атаның Һиндостан батшаһынан бер үгеҙ тиреһенә һыйырлыҡ кешеләр һорауы хаҡында һөйләнә. Ризалыҡ алынғас, Полван-ата тирене телгеләп, әллә күпме кешене һыйҙырырлыҡ майҙан яһай. Был кешеләрҙе ул Хорезмаға алып китә.

Ер алыуҙа йәки яңы ҡалалар, ауылдар һалыуҙа үгеҙ малының ҡатнашлығын Г.П. Снесарев хеҙмәттәрендә лә күрергә була. Ул Хорезм оазисындағы төрки телле халыҡтарҙа ла ситтән күсеп килгәндәрҙең урындағыларҙан "үгеҙ тиреһе ҙурлыҡ ер" һорауҙары тураһындағы тарих йәшәүен яҙа.

Был сюжет юкагирҙар тигән аҙ һанлы себер халҡында ла табылған. Ғалимдар был халыҡ һөйләшен һаманға тиклем ниндәй тел ғаиләһенә индерергә белмәй. Уларҙағы "Петр Бэрбэкин" риүәйәтендә Петр Бэрбэкинды ҡарттар Юғары донъя хужаһына ебәрә. Герой үгеҙ тиреһен киҫкеләп, оҙон еп яһап ала. Юғары донъяға килгәс, ҙур майҙанды еп менән уратып ала ла, эсенә алып килгән тупрағын һалып, дүрт мөйөшөнә тәреләр урынлаштыра. Шулай итеп, ул үҙенә ер яһап алып йәшәй башлай. Килеп бәйләнеүсе хужа ярандарына ул, үҙ еремдә торам, ти. Ысынлап та, ер бөтә яҡтан да кәртәләнгән, мөйөштәрендә тәре, шулай итеп Петр Бэрбэкин яҙанан ҡотолоп ҡала.

Бындай үгеҙ тиреһе менән ер яулау тарихтарына үгеҙ өҫтөндә яңы ерҙәргә күсеү мотивтары ла килеп ҡушыла. Үгеҙ ярҙамында яңы ерҙәргә барып етеү мотивы Бундахишндың зараостра текстарында телгә алына. Алты ҡәбилә башлығы мифик үгеҙ арҡаһына ултырып, Воурукаша күлен кисеп сыға һәм яңы ерҙәргә урынлаша.

Үрҙә һөйләнгән бөтә риүәйәттәр ҙә палеолит дәүеренән килгән үгеҙ культы менән бәйле. Тикшеренеүселәр билдәләүенсә, үгеҙ культының барлыҡҡа килеү нигеҙендә кешеләрҙең ерҙе үгеҙ образында күҙ алдына килтереүе ята.

"Урал батыр" эпосында ла Уралдың Ҡатил батшаның үгеҙе менән алышҡан урыны бар. Ҡатил үгеҙҙе "һарайының терәге" ти. Бында "Ҡатил һарайы" тигәндә беҙ ерҙе күҙ алдына килтерергә тейешбеҙҙер. Ҡатил ере - теге донъя, йәғни ерҙең эсе, шунлыҡтан бөтә ер ҙә үгеҙ өҫтөндә тора булып сыға. Башҡорттарҙа шулай уҡ ер - үгеҙ мөгөҙөндә, ә үгеҙ ҙур балыҡ өҫтөндә тора, тигән дә миф йәшәгән. Үгеҙ арып китеп, ерҙе бер мөгөҙөнән икенсеһенә күсереп алған мәлдә ер тетрәүҙәр була икән.

Шулай итеп, беренсе ҡарашҡа сәйер генә булған үгеҙ тиреһе менән ер үлсәү күренеше нигеҙенә боронғо башҡорттарҙың донъяға булған мифологик ҡарашы, йәғни, үгеҙҙе йәки үгеҙ тиреһен ер образында итеп күҙаллауҙары һалынған икән.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Иван ЛЕПЕХИН

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Илеш старшина үҙенең барса ҡунаҡтары менән беҙгә ҡотлау һүҙҙәрен белдерҙе; быға тиклем уның һөйләшкеһе лә килмәй ине. Ул беҙгә үҙенең күптән түгел ҡырғыҙ-ҡайсаҡтарҙан ҡасып килгән йәш кейәүен күрһәтте, ул ысынлап та күҙ ҡарашы һәм үҙен тотоуы буйынса башҡорттарҙан күпкә айырылып тора ине; бик ситләшеүсән һәм ярамһыҡланыусан, тик беҙгә ысын башҡорт ихтирамлылығын күрһәтә алманы, беҙҙең менән бүрек кейгән килеш һөйләшергә мәжбүр булды: старшина алдында ул баш кейемен һалырға теләмәне, сөнки ҡатындың туғандары алдында башыңды яланғас ҡалдырыу алама ғәмәл булып һанала.

Башҡорттар менән хушлашып, старшина туғандары оҙатыуында уның олоҫона юл тотттоҡ; уның йәйләүенә тиклем бик йыраҡ булмаһа ла, беҙгә шау-шыулы башҡорттар менән аралашыу оҙаҡ булып тойолдо. Уларҙың һәр ҡайһыһы беҙҙең янға ҡыйыу һәм, әйтергә кәрәк, рияһыҙ рәүештә яҡын килеп, беҙгә йөкмәтелгән эш буйынса төрлө һорауҙар бирҙе, Брагин эшмәкәрлеге ваҡытында һәм башҡа ошондай осраҡтарҙа ниндәй ауырлыҡтар кисерергә мәжбүр булыуҙары хаҡында ла ҡушып һөйләне. Илеш старшина беҙҙе мөмкин булғанса һыйларға һәм ихтирам күрһәтергә тырышһа ла, уның һыйы беҙҙең ҡорһаҡҡа тәғәйен түгел ине; беҙ унан тиҙерәк оҙатып йөрөүсе биреүен теләй инек. Тиҙҙән беҙгә уны күрһәттеләр, тик беҙ унан ҡәнәғәт була алманыҡ. Был башҡортто Сураш Мәргән тип атайҙар ине, ул Бөрйән бунтын ҡуптарыусыларҙың башында тороп, йыш иҫкә алынған таш эшкәртеүсе Брагинды үҙ ҡулдары менән үлтергән. Старшина тарафынан минә ҡарата күрһәтелгән оло һәм иң ҙур хөрмәт уның үҙе менеп йөрөгән атын минең өсөн эйәрләргә бойороуы булды: бындай ололау уларҙа айырым кешеләргә генә күрһәтелә һәм мөһим тип һанала. Шуға өҫтәп, көслө ямғырға ҡарамаҫтан, ул беҙҙе Төркмән старшина йәйләүенә тиклем оҙата барырға риза булыуы хаҡында әйтте. Сураш Мәргән, һәр саҡта ла Брагин эргәһендә булғанлыҡтан, уның барлыҡ эш урындарын да белә ине, ә уларҙың Төркмән старшина йәйләүенән 30 саҡырымдарҙа, Һаҡмар түбәләренән 25 саҡырымда, Сураш Мәргән исеме менән аталып йөрөтөлгән үҙ ауылы эргәһендә булғанын иң мөһимдәренән һанай ине. Ҡыҙыҡһыныу, дөрөҫөрәге, бурысыбыҙ беҙгә ошо урында ла булып китергә мәжбүр итте.

Үҙебеҙҙең станға ҡайтҡас, бик күп эйәрләнгән аттар күрҙек, был беҙҙе Төркмән старшина йәйләүендә лә мәрхүмде иҫкә алыу мәжлесе атҡарыла икән, тип уйларға мәжбүр итте. Беҙҙе оҙата килеүсе башҡорттар, әлеге уйыбыҙҙы белгәндәй, ошонда йыйылған башҡорттарҙың Төркмән старшина йәйләүенән булып, беҙгә ихтирам йөҙөнән йыйылыуы хаҡында белдерҙе. Уларҙың әйткәне беҙҙең өсөн сәйерерәк булып тойолдо, сөнки бөтә йәйләү урынлашҡан арауыҡ сирек саҡырымдан да артмай ине. Әммә башҡорт ғәҙәте һәм аттарҙың уғата күп булыуы уларҙы йәйәү йөрөүҙән биҙҙергән, шулай булғас, бер саҡырым тирәһе ерҙе йәйәүләп үтеү башҡорт өсөн оло походҡа тиң.

**(Дауамы бар).**

***✓ Иҫәновтар малайҙарын ҡамсы менән дә, прәник менән дә тәрбиәләмәй. Бары тик уларҙы яҡшылыҡҡа өйрәтә, киләсәктә, үҙаллы тормош көтә башлағанда, ауырлыҡтар буласағын аңғартырға тырыша.***



# АТАЙЫҒЫҘ

## hеҙ генерал

**Чечендарҙа "Улыңа дошман бул, үҫеп еткәс, ул һинең иң яҡын дуҫыңа әүерелер" тигән әйтем бар. Бик ҡаты яңғырай был һүҙҙәр. Бында атайға ла, ул булған кешегә лә ғәйәт ҙур һынау көтөлгәне күҙаллана. Бер үк ваҡытта ир-ат тәрбиәләүҙең ни тиклем яуаплы һәм сауаплы, ауыр һәм ҡатмарлы тормош мәктәбе булыуы ла төҫмөрләнә. Мәҡәлдә "дошман" һүҙен "ҡаты талап" тип аңларға кәрәк икәне аңлашылалыр. Ҡатын-ҡыҙ милләтте тыуҙырыусы, ә уны бар итеүсе - ир-ат. Әйтемдә талаптар ҡаты ҡуйылһа ла, һөҙөмтәһен ҡараһаң, бындай тәрбиә яҡшы булып та тойола.**

**Беҙҙең халыҡта иһә, ир-ат тәрбиәләү мәсьәләһе бөтөнләй икенсе төрлө ҡуйылған. Башҡорт атайҙары улдарын кәмһетмәҫкә, үҙенә тиң күрергә, хатта уларҙы тәрбиәләү эшендә туранан-тура ҡатнашмаҫҡа тырыша. Дөрөҫөн әйткәндә, атаһы исеменән был эште әсәйҙәр алып бара. "Атайыңа әйтәм", "атайың ни тиер бит әле", "атаң күреп ҡалмаһын", "атаңа оҡшап" тигән һүҙҙәр менән, асылда, әсәйҙәр тәрбиә эшен алып бара.**

**Милләтебеҙҙең арҙаҡлы ир-уҙаманы, күренекле йәмәғәт эшмәкәре, отставкалағы милиция полковнигы, Эске эштәр министрлығының ветерандар советы ағзаһы, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған участка инспекторы, өлгөлө ғаилә башлығы, өс уланға атай, туғыҙ ейән-ейәнсәргә олатай Риф Шәрифрахман улы ИҪӘНОВ улдарына таянып йәшәй. Дөрөҫөрәге, уларҙы үҙенең урынына әҙерләй. Ҡыҫҡаһы, ошо хаҡта ентекләберәк...**

### Милләтһеҙ кеше юҡ...

Улдарының тыуып-үҫкән саҡтары совет осорона тура килә. Ул замандың үҙенә күрә уңайлыҡтары ла, ауырлыҡтары ла күп була. Совет власы барлыҡ граждандарын да эш урыны менән тәьмин итеүгә өлгәшә. Бөгөн иһә, эш урыны беҙҙең дәүләттә иң ҙур проблема булып һанала. Ҡалған күп кенә проблемалар тап ошо проблемаға барып ялғана ла инде. Уның ҡарауы, ул заманда барлыҡ нәмәләр өсөн дә оҙон-оҙаҡҡа һуҙылған сиратҡа баҫырға кәрәк ине. Тәүге улдары Рөстәм тыуғансы ғаилә башлығы хеҙмәт урынында тырышып эшләп, бәләкәй булһа ла, бүлмә алыуға өлгәшә. Улы тыуғас, бер башҡа үҫеп киткәндәй була атай кеше. Ҡатын уңғаны ул таба, тиҙәр. Риф Иҫәновтың хәләл ефете Рәйлә уға тағы бер-бер артлы Рәфис, Айҙар атлы уландар бүләк итә.

Уландарын тәрбиәләүгә килгәндә, ғаилә башлығы башта уҡ бер нәмәне аңлай һәм яңылышмай: балаларҙы үҙебеҙҙең милли асылыбыҙға тоғро итеп тәрбиәләй алһа ғына, улар ысын кеше булып үҫә аласаҡтар. Был йәһәттән халҡыбыҙҙың мәшһүр шағиры Рәми Ғариповтың: "Йөрәгендә халҡы булмағандың, кеше булырға ла хаҡы юҡ..." - тигән һүҙҙәре атай кешегә лозунг булып яңғырай. Әммә был йәһәттән иң ҙур ҡаршылыҡ ул заманда баш ҡалабыҙҙа башҡорт балалар баҡсаларының һәм мәктәптәренең бөтөнләй булмауына бәйле килеп сыға. Ул заманда башҡорт балалар баҡсалары тураһында һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел, ә ҡалалағы берҙән-бер, хәҙерге Фатима Мостафина исемендәге 20-се мәктәп Өфөнөң көньяғында. Ә шулай ҙа Иҫәновтар уландарын Черниковка бисҭәһенән "Үҙәк баҙар"ға тиклем көн һайын автобуста һәм трамвайҙа йөрөтөп уҡытырға ҡарар итә.

Үҙе оператив хеҙмәттә, участка инспекторы булып эшләгәс, өйөнә төрлө ваҡытта ҡайтып, ашығыс эш килеп сыҡҡанда төрлө ваҡытта эшкә китеп йөрөгәс, балаларҙы мәктәпкә йөрөтөү еңелдән булмай. Әйтәйек, төнгө өстә өйгә ҡайтһа, иртәнге туғыҙға улдарын мәктәпкә алып барып еткерергә кәрәк. Һәр ауырлыҡтың аҙаҡтан еңеллеге лә килә. Хәҙер Риф Иҫәнов үҙенең шул саҡта дөрөҫ юлда булғанлығын аңлай. Улай ғына ла түгел, ул улдарын милли рухта тәрбиәләй алмаһа, бөгөн беҙ белгән арҙаҡлы шәхес кимәленә күтәрелә алмаҫ ине. Кем белә, бәлки эшҡыуарлыҡ өлкәһендә күберәккә лә өлгәшер ине, милли шәхес күрһәткесе түбән булыр ине. Был йәһәттән Рәми Ғариповтың тағы бер шиғыр юлдары шулай яңғырай:

*Һинең бәхетең һуң кемгә кәрәк,*
*Үҙ ояңды ғына ҡайғыртһаң...*

### Балаңды түгел, үҙеңде тәрбиәлә...

Улдарына ҡул күтәреп һуҡҡаны булмай атай кешенең. Был йәһәттән "Ҡулындағы ҡамсы улыңды дарҙан ҡотҡарыр" тигән французлар Риф Иҫәновҡа көнләшеп ҡарай ала. Уның улдарына күҙ ҡарашы ла етә. Хәҙер иһә улдары аталарының күҙенә, уның кәйеф-хәленә ҡарап ҡына эш итергә өйрәнгән. Уның ҡарауы, әсәләре уларҙы һөйөп-яратып ҡына тора. Уныһы ла кәрәк. Кәрәк саҡта "Атайыңа әйтәм" тип тә тәрбиәләй Рәйлә ханым малайҙарын. Атай кеше малайҙары алдында бер ваҡытта ла тәртипһеҙлек өлгөһө күрһәтмәй. Улар бәләкәй сағында аталарын эскән килеш күрмәй. Иҫәновтар малайҙарын ҡамсы менән дә, прәник менән дә тәрбиәләмәй. Бары тик уларҙы яҡшылыҡҡа өйрәтә, киләсәктә, үҙаллы тормош көтә башлағанда, ауырлыҡтар буласағын аңғартырға тырыша. "Балаңды тәрбиәләмә, үҙеңде тәрбиәлә. Балаң барыбер үҙеңә оҡшаясаҡ", тиелә инглиз халыҡ мәҡәлендә.

Ә инде уландары үҫеңкерәп еткәс, атай кеше уларға буласаҡ тормош иптәшенең үҙебеҙҙең милләттән булырға тейешлеген иҫкәртә башлай. Участка инспекторы булып эшләгәндә ул ҡатнаш ғаиләләрҙәге конфликт ситуацияларҙың ниндәй ерлектә һәм ни рәүешле тыуыуына иғтибар итә йөрөй, балаларҙың атай менән әсәй араһында ғына түгел, ике дин, ике менталитет араһында үҙ-үҙен таба алмай ҡаңғырып йөрөгәненә күп тапҡырҙар шаһит була. "Беҙҙә ҡатнаш никахлы ғаиләләрҙә, асылда, милли ҡапма-ҡаршы тороу күҙәтелмәһә лә, ир менән ҡатын өлкәнәйә килә, бер-береһенә дәғүә белдерерлек һүҙ ҡалмағас, милли кәртте тартып сығарыусан. Ошо нигеҙҙә айырылышҡан, һуғышҡан, хатта төрмәгә барып эләккән ғаиләләрҙе күрергә тура килде", ти элекке участка инспекторы был мәсьәләгә үҙенең мөнәсәбәтен белдереп.

### "Тәрбиә" уйыны

Риф Иҫәновтың йортонда башҡарылған был тәрбиә уйыны шунан ғибәрәт була. Өйҙәренең стенаһына малайҙарҙың уҡыуҙа өлгәшкән уңыштарын һәм уңышһыҙлыҡтарын сағылдырған табло эленеп ҡуйыла. Унда билдәләр балл системаһы буйынса ҡуйыла. Малайҙар мәктәптән килеп инеү менән ата-әсәһенә шул көндө ниндәй билдә алыуы хаҡында хәбәр итә. Әгәр ҙә, әйтәйек, Рөстәм "бишле" алып ҡайтһа, уның исеме янына "+15" тигән, "икеле" алһа, "-15" тигән билдә ҡуйыла. Атай кеше телдән үҙенең бонустарын да билдәләй. Әйтәйек, малай "икеле" алып ҡайтһа - "15 ҡайыш". Әммә был ҡайыштар һуғылмай, ни бары иҫәпләнеп кенә барыла. Малайҙарҙың береһе бер көндө "15 ҡайыш" алһа, артабанғы көндәрҙә ул "ҡайыштарҙан" ҡотолор өсөн "бишле" алырға, бының өсөн тырышырға тейеш бит инде. Ғаилә башлығы был "Тәрбиә" уйынын малайҙарының тырышып уҡыуына стимул булһын өсөн уйлап сығара. Белем алыуға ҡарата булған бындай иғтибар малайҙарын юғары дәрәжәгә күтәреүгә тиң сара була.

Белеүебеҙсә, 1917 йылға тиклем ҡайһы бер мәҙрәсәләрҙә хәлфәләр шәкерттәрен тал сыбығы тотоп һабаҡ биргән. Ә был осраҡта малайҙарҙың атаһы ошоға оҡшаш "ҡайыш-бонус"тарҙы билдәләп, улдарында сәм уята белгән. Әйткәндәй, "Әлепте таяҡ тип белмәү" тигән һүҙбәйләнеш нәҡ шундай хәлфәләрҙең һабаҡ биреү алымына бәйле килеп сыҡҡандыр, тип уйланыла. Ололар һөйләүенсә, хәлфәләрҙең ҡулындағы тал сыбығы уйнап торған. Хәлфә һабаҡ биргән саҡта шәкерттең әле уң, әле һул, әле уң, әле һул аяғына һуғып алып, уның ятлап ала торған һабағын шартлы рефлекс кимәлендә нығытҡан. Аҙаҡтан алған һабаҡты кире ҡабатлаған саҡта, шәкерт яуап бирә алмай торһа, тал сыбығы тейешле урынды семетеп алыу менән мәсьәлә лә сиселгән. Әйткәндәй, Риф Иҫәнов та малайҙарын тәрбиәләгән саҡта ошондай уҡ ысулды, тик үҙенсә, малайҙарын һуҡмайынса, "ҡайыш-бонус"тар билдәләп кенә тәрбиәләгән. Халыҡ педагогикаһын ошондай ишараларға, "ҡош теле"нә бәйле был ысулын ҡулланыусы уҡытыусылар әле булһын бар. Мәҫәлән, бер ауыл мәктәбендәге математика уҡытыусыһының, ҡағиҙәләр иҫендә нығыраҡ һаҡланһын өсөн, уҡыусыларҙың һәр ҡайһыһын берәр башҡорт халыҡ йырын башҡартып уҡытыуы хаҡында ишеткәнем бар.

### Иң ҡаты яза

Атай кеше тәртип боҙған өсөн малайҙарын ҡаҡмай-һуҡмай, уның ҡарауы, мөйөшкә баҫтыра. Ғаилә тарихында был йәһәттән Рөстәм менән Рәфистең өс сәғәт буйына мөйөштә баҫып тороуына бәйле хәтирә һаҡлана. Тарихы шулайыраҡ. Өс бер туған малайҙар бер көндө ихата янындағы майҙансыҡҡа уйнарға сыға. Өлкәндәр бәләкәй ҡустылары Айҙарҙы сәңгелдәккә ултыртып бәүелтә башлай. Бәүелсәкте абайламайынса ысҡындырып ебәреүҙәре була, Айҙар унан шыуып төшә лә, тимер сәңгелдәктең ҡыры уның башын һыҙырып үтә. Малайҙың башынан урғылып ҡан ағырға тотона. Атай-әсәй оло хафаға төшә. Ғаилә башлығы тиҙ ярҙам машинаһын саҡырта. Айҙарҙы дауаханаға алып китер алдынан малайҙарҙы мөйөшкә баҫтыра. Улар өс

**АВТОРҘАН:**

*Уландарын тәрбиәләүгә килгәндә, ғаилә башлығы башта уҡ бер нәмәне аңлай һәм яңылышмай: балаларҙы үҙебеҙҙең милли асылыбыҙға тоғро итеп тәрбиәләй алһа ғына, улар ысын кеше булып үҫә аласаҡтар.*



✓ *Әҙәм балаһы нисек кенә борғаланып-тыбыҙыҡламаһын, үҙе үҫкән, шәхес булып формалашҡан мөхиттең йәшәү ҡанундарын үҙенеке итә, шул мөхиттән үҙенә дуҫтар таба, тормош иптәшен һайлай.*



# ПОЛКОВНИК ИКӘН... булырға тейешһегеҙ

сәғәттән генә кире өйгә әйләнеп ҡайта. Шул ваҡыт үткәнсе Рөстәм менән Рәфис мөйөштә баҫып тора. Һуңынан мәктәптә уҡығанда шул уҡ Айҙар баҫҡыстан ҡолап, аяғын һындыра. Дүртенселә уҡыған Рөстәм, борсолоп, атаһына: "Атай, Айҙар аяғын һындырҙы. Уны 17-се дауаханаға алып киттеләр", - тип илай-илай шылтырата. Ҡыҫҡаһы, Риф Иҫәнов "мөйөшкә баҫтырыу" ысулы менән малайҙарын тәртип хаҡында уйланырға мәжбүр итеп кенә ҡалмаған, ә уларҙы бер-береһенә яуаплы ҡарарға өйрәткән. Туғанына ҡарата булған яуаплылыҡ тойғоһо ҡандан ғына килмәй, бактиһәң, ошо рәүешле тәрбиәләнә икән.

## Киленде атайҙар һайлай

"Рәсәйҙең атҡаҙанған участка инспекторы" Риф Иҫәновҡа төрлө ғаиләләрҙе күрергә тура килә. Улдарҙың ниндәйҙер ҡыҙҙы артыҡ һөйөп, ата-әсәһе менән ғүмерлеккә дошманлашып, ғүмерлеккә айырылышҡандарын да күп күрә ул. Ғөмүмән, атайҙар менән улдарҙың мөхәббәт мәсьәләһенә бәйле барлыҡҡа килгән ҡатмарлы проблемалары айырым һөйләшеүҙе талап итәлер, моғайын. Шулай ҙа Иҫәнов мөхәббәт арҡаһында дошманлашып, һуңынан улы Андрейҙы үлтергән Тарас Бульбаны хупламауын белдерҙе. Был йәһәттән уның фекере шулай: "Мин һине тыуҙырҙым, мин һине үлтерәм", - тип улын үлтергән Тарас атайҙы бер нисек тә аҡлап булмай. Мин уның менән риза түгелмен. Нисек инде үҙ ҡулың менән балаңды үлтермәк кәрәк? Был башҡа һыймаҫлыҡ эш. Ул ниндәй генә хыянат йә енәйәт эшләмәһен, Тарастың үҙ улы бит әле. Икенсенән, Андрей мөхәббәт арҡаһында шул юлға барған икән, ул атаһының хатаһын ҡабатлаған. Йәғни, атаһының үҙенә биреп бөтмәгән тәрбиәһе, йәғни улына ҡарата булмаған мөхәббәте арҡаһында ошо юлға барырға мәжбүр булған, йәғни мөхәббәтте икенсе сығанаҡтан тапҡан. "Шынаны - шына менән" тиҙәр бындай осраҡта. Улдар аталарҙың хатаһын ҡабатлайҙар ғына. Был осраҡта Тарас улын түгел, үҙен үлтерергә тейеш була. Өсөнсөнән, мөхәббәт тойғоһо кешене бәхетле тормошҡа ла, һәләкәткә лә алып килергә һәләтле..."

Малайҙар ҙа үҫеп етә, уларҙы башлы-күҙле итергә лә кәрәк. Шулай булғас, был йәһәттән атай-әсәйҙәр менән улдарҙың төрлөсә мөнәсәбәте лә була. Ағайҙары күптән өйләнер йәшкә етһә лә, барыһынан иртәрәк кеселәре Айҙар "өлгөрөп" етә. Уның бер ҡыҙ менән осрашып йөрөгәнен белгән атай кеше уларҙың икеһен бергә театрға алып бара, был юл менән буласаҡ килененә күҙ-зиһен һынауы үткәрә.

Артабан уларҙың ниәттәре ысын булғас, ҡасып-боҫоп осрашып йөрөмәҫкә тәҡдим итә лә, ҡыҙҙың атаһы менән әсәһен барып күрә. Атаҡлы яусыһын да таба. Айҙарҙы, шулай итеп, өйләндерәләр.

Артабан башлы-күҙле булыу мәсьәләһендә уртансы улдары Рәфис өлгөрөп етә. Дөрөҫөрәге, Рәфис тә Айҙар ҡустыһы кеүек, буласаҡ кәләшен үҙе алдан уҡ табып, ата-әсәһе күрһәткән ҡыҙға ҡарамай. Атай менән әсәй уның һайлағанына күнә. Гөрләтеп туй үткәреп ебәрәләр. Атай кеше улының был үҙаллылығын ыңғай баһалай һәм, өйләнгән улын башҡа сығарған боронғо атайҙар кеүек, Рәфисте үҙенең тыуған Ишембай районы Биксән ауылына "үҙаллы" тормош көтөргә оҙата. Хәҙерге көндә Рәфис өс улдың, ике ҡыҙҙың атаһы булып, крәстиән фермер хужалығын етәкләп, ауылда йәшәй. Был осраҡта атай кешенең ҡарары шулай була: "Әгәр ҙә һин шулай үҙаллы икәнһең, саҡ ҡына менән ситтәрәк тә йәшәй алаһың..."

Ниһәйәт, сират өлкәндәре Рөстәмгә лә килеп етә. Был юлы инде малайҙарын өйләндереү буйынса оло тәжрибә туплаған атай кеше бөтөн инициативаны үҙ ҡулына алып, Рөстәмгә киленде үҙе һайлап алып бирергә була. Боронғо атайҙар кеүек. Табыла Баймаҡ районының Буранбай ауылынан, данлыҡлы Буранбай сәсән нәҫеленән сыҡҡан, халыҡ теле менән әйткәндә, "әсәһенең аҡ һөтөн имеп үҫкән" ундай тәрбиәле лә, тырыш та, уңған да, матур ҙа башҡорт ҡыҙы. Рөстәм менән киленгә никах уҡытыу тантанаһы бик иҫтәлекле һәм көтөлмәгәнсә килеп сыға. 23 февраль көндө Иҫәнов ғаилә ҡарамағындағы "Айҙар" кафеһына үҙенең һәм буласаҡ килененең туғандарын, коллегаларын Рәсәй армияһы көнө уңайынан саҡырып ала. Мәжлескә һуғышта һәләк булған яугирҙарға аят уҡырға тип мулла ла саҡырыла. Аят уҡылып, аш мәжлесе башланғас, ғаилә башлығы бында йыйылыуҙың тағы бер маҡсаты барлығын әйтә. Ул да булһа - Рөстәм менән Гөлиәгә никах уҡытыу. Шуныһы ҡыҙыҡ: ул был хаҡта белдереү яһағансы, уҡыласаҡ никах хаҡында бер кем дә, табын башлығының ҡатыны ла, ике яҡтан туғандар ҙа, йәштәр ҙә, хатта мулла ла белмәгән булып сыға. Ғүмере буйы оператив хеҙмәт башҡарыусы Риф Иҫәнов өлкән улы Рөстәм менән килененә никах уҡыуҙа ла ана шундай оперативлыҡ күрһәтә.

Дини яҡтан ҡарағанда, уның был аҙымы һәр яҡтан аҡлана. Сөнки бер хәҙистә әйтелгәнсә, өс осраҡта: мәсеткә намаҙға ашығыу, мәрхүмде ҡәбер эйәһе итергә ашығыу һәм еткән ҡыҙыңды йә улыңды башлы-күҙле итергә ашығыу шайтан фигеле түгел.

## Мөхит яҙмышты билдәләй

Атай кеше малайҙарын мәктәпкә барғанда ла, урамға уйнарға сыҡҡанда ла мөмкин тиклем бергә йөрөтөргә тырыша. Был хәл аңлашыла ла. Әгәр ҙә малайҙар яңғыҙ-ярым уйнарға сығып, ундағы икенсе бер малай менән танышып, уның йоғонтоһона бирелһә, артабан инде малай туғандарынан да, үҙе тыуып үҫкән мөхиттән дә ситләшә башлай. Риф Иҫәнов малайҙарын урам йоғонтоһонан аралар өсөн уларҙы ихаталағы бер кем менән дә аралаштырмай. Малайҙар үҙҙәре уҡыған 20-се мәктәп уҡыусылары, класташтары һәм туғандары менән генә аралашып үҫә. Ҡайһы ваҡыт малайҙары мәктәптә йоҡларға ҡалып та уҡып йөрөй. Әгәр ҙә малайҙар ихатаға сыға икән, атай кеше уларҙың өсөһөн бергә генә сығара. Был юл менән ул малайҙарының араһына ситтәрҙе үткәрмәгән, кәртә ҡуйған. Мөхит яҙмышты билдәләй шул. Әҙәм балаһы нисек кенә борғаланып-тыбыҙыҡламаһын, үҙе үҫкән, шәхес булып формалашҡан мөхиттең йәшәү ҡанундарын үҙенеке итә, шул мөхиттән үҙенә дуҫтар таба, тормош иптәшен һайлай.

Риф Иҫәнов көләмһерәп: "Мин улдарыма: "Мин ҡартайҙым инде, әҙерәк кенә туҡталып торайым. Һеҙ алға сығығыҙ әле, һеҙгә әҙерәк эйәреп барайым", - тиһәм, береһе лә алға сығырға теләмәй. Алға этеп тә ҡарайым, барыбер алға сыҡмайҙар, миңә һәм бер-береһенә ҡарашып көлә лә ҡуялар..." - тигәйне бер мәл. Бында уларҙы үҙаллы аҙым яһарға баҙнат итмәйҙәр, өлгөрөп етмәгәндәр, тип уйларға ярамайҙыр. Киреһенсә, Рөстәм, Рәфис һәм Айҙар хәҙерге ваҡытта һәр ҡайһыһы үҙ бизнесын уңышлы алып бара. Ә уларҙың аталары әйткән айырым осраҡҡа килгәндә, бында Иҫәновтарҙың ғаиләһендә "Атай культы" ниндәй кимәлгә ҡуйылыуы хаҡында һүҙ йөрөтөргә мөмкиндер. Халҡыбыҙҙа "Атайым һаҡал ебәрмәйенсә, мин мыйыҡ үҫтермәйем", тигән тәрән мәғәнәгә эйә әйтем бар.

Иҫәновтың малайҙары аталары әйткәндә көтөп тормайынса ла эш итә. Был осраҡта атай кеше ситтән генә күҙәтеп йөрөй, уларҙы һынай, баһалай, хаталары булһа, төҙәтә. Әгәр ҙә ҙурыраҡ берәр проблема килеп сыҡһа, улдар шундуҡ аталары янына кәңәшләшергә килеп етә һала. Улар хәҙер хаҡлы ялдағы аталарын үҙҙәре эшләгән предприятиеға саҡырып, директорҙар советы рәйесе итеп ҡуйған.

Шулай ҙа Риф Иҫәнов улдарының ҡайһыһын яҡыныраҡ күрә, кемеһенә күберәк өмөт бағлай һәм ышана икән? Атай кешегә ошо һорауҙы төрлө яҡлап урата-урата биреп ҡарағайным, ул өндәшмәне. Улдарын ысын мәғәнәһендә яратҡан, уларҙың киләсәге өсөн борсолған атай кеше шулай итәләр. Хәйер, "Бармаҡтарҙың ҡайһыһын тешләһәң дә ауырта", тиҙәр. Ул улдарына ла, туғыҙ ейән-ейәнсәрҙәренә лә тигеҙ ҡарай, ул барыһын да үҙенә оҡшата, әммә уларҙың һөҙөмтәһе буйынса баһа бирә. Кемеһенәр насар һөҙөмтәгә өлгәшкән өсөн генә насар ул йәки ейән йәки ейәнсәр булып китмәй. Атай кешенең улдарына биргән баһаһы шундай: "Улдарым, мин үҙҙәрен яратҡан кеүек, балаларын, килендәрҙе яраталар. Шул тиклем эшһөйәрҙәр, ихластар, бер-береһенә ҡарата фиҙаҡәр мөнәсәбәттәләр. Кешегә ярҙамсылдар, һәр ваҡыт ҡул һуҙырға, ярҙам итергә әҙер генә торалар..." Бында тик бер фекер генә әйтелмәй ҡала. Эйе, Рөстәм, Рәфис һәм Айҙар, һис һүҙһеҙ, атайҙарына оҡшарға тырышалар.

Һәр бер атай кеше балаларының, бигерәк тә улдарының үҙенә оҡшауын теләйҙер ул. Бындай ынтылыш һәр бер атайҙа булалыр. Ә өс ул тапҡан Рәйлә ханым иһә, улдарының аталарынан да күберәккә өлгәшеүен теләй: "Атайығыҙ полковник икән, һеҙ генерал булырға тейешһегеҙ!"- тип әйтә килә. Әсәй кеше улдарының аталарын оятҡа ҡалдырмаҫҡа тейешлеген һәр ваҡыт әйтеп торорға тейештер. Атай кеше лә: "Һинә әсәйең алдында оят түгелме? Тәртип боҙһаң, ни йөҙөң менән әсәйең алдына килеп баҫаһың?" - тип малайҙарын оялтып алырға онотмай.

## Ҡыҙлы ата - наҙлы ата...

Рәйлә һәм Риф Иҫәновтарға Хоҙай ҡыҙ бирмәгән. Уның ҡарауы, бына тигән, ипле, тырыш һәм рухлы уландар бүләк иткән. Бер саҡ килеп, улдары өйләнеп, уларҙың ҡыҙҙары тыуып, ҡартатай менән өләсәйҙең йортонда тулып йөрөй башлағас, Риф Шәрифрахман улы шулай ти: "Ейәнсәрҙәрем тыуғас ҡына ҡыҙ баланың шул тиклегем тәмле икәнен тоя башланым. Улар шул тиклегем яғымлы, һинә һыйынып ҡына тора. "Эх, бик күп нәмә юғалтҡанбыҙ икән", тип, ҡатыным менән һөйләшеп алған булабыҙ. Тик, кем әйтмешләй, "поезд киткән" шул. Әгәр ҡыҙым булһа, әле улдарым күтәрелгән дәрәжә уның өсөн аҙ булыр ине. Мин уны мотлаҡ үҙемдең эшем буйынса ебәрер инем. Ул йә тәфтишсе, йә прокурор, йә судъя булыр ине. Сөнки мин элекке эшемдә саҡта бик күп ҡатын-ҡыҙ юристарҙы белә торғайным. Ҡыҙым хәҙерге ваҡытта, бәлки, кешеләрҙе һәм законды яҡлаусы белемле, ғәҙел, сибәр адвокат булыр ине. Бәлки, ул берәр юғары уҡыу йортонда профессор булып йөрөр ине. Сөнки мин ғүмерем буйы закон һағында йөрөгәс, халыҡ хужалығына һыуһап йәшәгәс, улдарыма шул йүнәлештә һөнәр һайларға ҡуштым..."

Шуға күрә, бөгөн ҡартатай кеше дүрт ейәнсәренә ситтән күҙ һалып йәшәй. Кәрәк саҡта уларға ярҙам ҡулы һуҙа. Уның фекере буйынса, ҡатын-ҡыҙ уңышлы кейәүгә сыҡмаған хәлдә лә, иҫ киткес белемле, һөнәрле һәм мөләйем булырға, туғандарын хөрмәт итә белергә тейеш. Бындай сифаттарға эйә ҡатын-ҡыҙҙы баһалаусы барыбер табыла.

## Улдарына таянған үлмәҫ

Әнүәр Әсфәндийәровтың башҡорт тархандары хаҡындағы китабында ("Башҡорт тархандары", "Китап", 2009) урядник Хәйбулла Иҫәновтың Рәсәй императорына тарханлыҡтан кенәзлеккә күсереү турағында үтенес менән хат яҙыуы хаҡында әйтеп үтелә. Хәйбулла Иҫәновтың тыуары Риф Иҫәнов хәҙерге көндә "Тархандар" йәмғәт ойошмаһын барлыҡҡа килтереп, шуны етәкләй. Ваҡытында башҡорт тархандары ижтимағи берекмәһен Дамир Ҡыуатов та ойоштороп ҡарай, тик был эш башланғыс этабында уҡ һүрелеп ҡала. Бөгөн ул был йүнәлештә үҙенә бик күп фекерҙәштәр, элекке башҡорт дворяндары нәҫеленән сыҡҡан Аҡсулпановтар, Ҡарамышевтар, Адутовтар менән танышып, Рәсәй мосолмандары дворяндарының ассоциацияһын төҙөүгә өлгәшә. Хәҙерге ваҡытта Иҫәнов Рәсәйҙең төрлө республикаларында, өлкәләрендә, сит илдәрҙә йәшәүсе башҡорт дворяндары нәҫелдәштәрен эҙләп табып, уларҙы берҙәм маҡсатта эш итергә өндәй. Илебеҙ капитализмда йәшәгән ваҡытта башҡорт дворяндары ойошмаһы иң өҫтә торған ойошмаларҙың береһе булырға тейеш, тип иҫәпләй Риф Иҫәнов. Уның был һүҙҙәре "Ике икең дүрт була" тигәндәй ябай һәм аңлайышлы.

Ғалим Рөстәм Рәжәпов иҫән сағында башҡорт дворяндары турағында бик ҡыҙыҡлы бер фекер әйткәйне: "Һәр бер аҫаба башҡорт дворян булған..." Ошо күҙлектән ҡарағанда ла, Риф Иҫәнов әлеге көндә милләттең киләсәге өсөн кәрәкле булған иң мөһим эштәрҙең береһе менән шөғөлләнә. "Тархандар" йәмғәт ойошмаһы элек беҙҙең шундай-шундай дворян олатайҙар, Ҡыуатовтар, Аҡсулпановтар, Ҡарамышевтар, Тасимовтар, Үрәзмәтовтар, Иҫәновтар, Ҡотдосовтар, Иҫәнгилдиндәр һәм башҡалар булған, тип ғорурланыр өсөн генә лә түгел, бер үк ваҡытта милли буржуазияны аяҡҡа баҫтырыр өсөн дә кәрәк. Риф Шәрифрахман улы Иҫәнов үҙенең улдарын тәрбиәләгәндә лә, "Тархандар" ойошмаһын етәкләгәндә лә ошо маҡсатты төп йүнәлеш итеп ҡуя. Киләсәктә, бынан бер быуаттан һуң да, ике быуаттан һуң да Иҫәновтар заты иҫән булһын өсөн, милләт йәшәһен өсөн кәрәк был. Улдарына таянған үлмәҫ...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ӘҘИП ҺҮҘЕ

**Шағирә Фирүзә Абдуллинаның исеме гәзит уҡыусыларға яҡшы таныш. Интернетта "Ғәжәп донъя" төркөмөн асып, шиғырҙарын шунда ҡуя башлау менән, автор күптәрҙең күңел серҙәшенә әйләнде. Фирүзә Дәүләтша ҡыҙы Баймаҡ районы Шүлкә ауылы ҡыҙы, ун балалы ишле ғаиләлә төпсөк бала булып донъяға килә. Баймаҡ лицей-интернатын тамамлаған, Стәрлетамаҡ педагогия институтының филология факультетында уҡый. Студент сағында Ҡырмыҫҡалы районы Иҫке Бәпес ауылы егете Фидаил Абдуллин менән ғаилә ҡороп ебәрәләр. Ғүмеренең 33 йылын балалар уҡытыуға биргән юғары категориялы уҡытыусы әле лә ошо эшен дауам итә. Ул Ҡырмыҫҡалы районында "Илһам" әҙәби берекмәһен ойоштороусыларҙың береһе лә.**



# ХОҘАЙ ТЕЛ АСҠЫСЫ БИРГӘН ИКӘН...

### "Ҡайҙан килеп сыҡтың?"

"Быға тиклем һин ҡайҙа булдың? Нишләп күренмәй инең?" - тигән һорауҙы миңә йыш ишетергә тура килә. "Эшләнем, балалар үҫтерҙем - йәшәнем!" - тип яуап бирәм. Беренсе шиғырымды мин, өсөнсө класс уҡыусыһы, 8 Март байрамына әсәйемә бағышлап яҙғайным. Ошо беренсе шиғырҙан башланып китте лә инде минең был мауығыуым. Күлһәләр ҙә, мыҫҡыл итһәләр лә яҙып маташтым. Сыңғыҙ һигеҙ йыллыҡ, аҙаҡ Баймаҡ интернат-мәктәптәрендә уҡыған йылдарҙа стена гәзиттәрендә генә түгел, хатта "Октябрь байрағы" тип аталған район гәзитендә лә донъя күргеләне шиғырҙарым. Редакция эргәһендә "Ҡыңғырауҙар" әҙәби ижад түңәрәге эшләй ине, унда тәжрибәле апай-ағайҙарҙың баһаһын, фекерен ишетеү ҙә ҡанатландырғандыр, күрәһең. Рус теле һәм әҙәбиәте фәндәренән уҡытыусы Мәүжидә Рахманғол ҡыҙы Айыткодоваға кеше һәм уҡытыусы булараҡ ғашиҡ инем. Ошо һөкләнеүым мине Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтының рус һәм башҡорт филологияһы факультетына уҡырға алып килде. "Ашҡаҙар" әҙәби ижад түңәрәгендә биш йыл шөғөлләндем, шиғырҙар яҙыуҙы дауам иттем. Диплом менән бергә никах таныҡлығы ла ҡулға алып, ғаилә тормошо башланым. Шәхси юғалтыуҙарымдың шиғриәттән генә түгел, йәшәүҙән дә биҙҙергән осором булды. Шулай итеп, шиғриәт өсөн мин юғалып торҙом. Интернеттағы "Бәйләнештә" сайтында төркөм асып, унда донъя күргән шиғырҙарым кемдәргәләр оҡшамаһа, бәлки, артабан да шулай йәшәп ятҡан булыр инем. Бөгөнгө көндә "Ғәжәп донъя" тип аталған был төркөмдөң ете мең ярым самаһы уҡыусыһы бар. Әгәр төркөмгә ҡуйылған шиғырҙарым кемдәргәләр оҡшай икән, улар минән шиғыр һорай икән, яҙмаҫҡа йәки яҙылғанды йәшереп торорға минең ниндәй хаҡым бар? Әгәр Хоҙай миңә тел асҡысы биргән икән, кешеләрҙең күңелдәренә ятырлыҡ фекерҙәрҙе башыма һалған икән, тимәк, мин яҙырға, кешеләр менән бүлешергә тейешмен тип уйлайым. Минең кеүек тойған, уйлаған кешеләр бар икән, тимәк, минең шиғриәтемдең дә булырға хаҡы бар! Ә инде шиғриәтме был, түгелме - бөтөнләй башҡа эш...

### Шиғриәт шырлығы

Ғүмерем буйына (33 йыл була бынйыл) мәктәптә рус теле һәм әҙәбиәте уҡыттым. Башҡорт теле уҡытыу бәхете эләкмәне. Шуға ла башҡорт әҙәбиәте донъяһынан бөтөнләй ситкә кителгән. Яңы исемдәр, яңы әҫәрҙәр, яңы ҡараш һәм яңы талаптар... Урман араһынан килеп сыҡҡан Робинзон һымаҡ, заман шиғриәте тураһында бер нәмә лә белмәүем асыҡланғас, аптырап ҡалдым. Ҡосаҡ тултырып шиғри йыйынтыҡтар алып ҡайтып, уҡырға ултырҙым. Рәмил Йәнбәк, Исҡәндәриә, Рәмил Ҡолдәүләтте уҡып сығырға ғына етте түҙемлегем. Һәр бер шиғырҙан үҙемдә ҡабатлау йәки фекер оҡшашлығы эҙләп аптырандым да, башҡаса уҡымаҫҡа булдым. Минең шиғри назанлығымдың ыңғай яҡтары ла бик күп икән: кемделер ҡабатлауҙан ҡурҡмайынса, һәр фекеремде беренсе булып тапҡан кеше итеп тойоп яҙа алам! Плагиатта ғәйепләһәләр... аңлатып ҡарармын, йәки шиғырымды юҡ итермен. Был шырлыҡта аҙашыуы бик еңел! Ләкин һәр шағирҙың үҙенә генә хас тауышы бар. Бер кем дә башҡа берәүҙе ҡабатлай алмай, минеңсә. "Шиғриәт шырлығы" исемле шиғырымда әйткәнсә:

*Күпме шағир! Күпме шиғыр…*
*Белеп хатта бөтмәйем,*
*Шиғриәттең шырлығында*
*Аҙашыуҙан шөрләйем.*

*Һәр береһенең үҙ көйө*
*Шырлыҡтағы ҡоштарҙың,*
*Таный алырмынмы көйөн*
*Шиғыр яҙған дуҫтарҙың?*

*Ғәйеп итеп күрмәҫтәрме,*
*Күптәрен танымаһам?*
*Белмәйенсә, берәйһенең*
*Тауышын ҡабатлаһам?*

*Үҙ тауышым, үҙ моңом бар,-*
*Ишетерме берәйһе?*
*Шиғриәттең шырлығында*
*Әле урын эҙләйһе…*

Урманда ла бит турғай үҙенсә сырҡылдаған була, ҡәкүк үҙенсә һыҙа, һандуғас үҙенсә моң түгә. Һәм һәр береһе кәрәкле, һәр ҡайһыһы ҡәҙерле. Минең шиғриәтем дә кемгәлер кәрәк, кемдер өсөн мөһим. Шулай булғас, үҙ тауышымды сығарырға минең дә хаҡым барҙыр.

### Минең ижадым

Әгәр кемдер өсөн минең яҙмышым ал да гөл генә тойола икән - ул һис шикһеҙ яңылыша. Бер кемдең дә яҙмышы тик бәхет-шатлыҡтан ғына тормайҙыр ул. Ана шул тормош юлында осраған ауырлыҡтарға бирешмәй, еңеүсе булып сығыу өсөн аҡыл, сабырлыҡ, түҙемлек кәрәк. Мин үҙем әсәйемдең кәңәштәренә таянып йәшәнем һәм байтаҡ һынауҙарҙа һынмаһым. Ологая килә шуны аңланым: әсәйем миңә биргән кәңәштәрҙе мин ҡыҙҙарыма еткерергә тейешмен. Ошо теләк мине ҡулыма ҡәләм алырға, уйфекерҙәремде "Әсәйем һабаҡтары" тип аталған шиғырҙар шәлкеменә һалырға мәжбүр итте. "Киске Өфө"гә рәхмәт: шәлкемгә ингән шиғырҙарым гәзиттә өс ай буйына һандан-һанға баҫылып килде, халыҡ араһында танылыу алды. Яҙыусылар берлегенең шиғриәт бүлегендә ижадымды тикшереп, ошо шиғырҙарҙы бер китап итеп туплап, "Китап" нәшриәтенә тапшырырға йүнәлтмә лә бирҙеләр. Ул арала үҙнәшер ысулы менән ике китап баҫтырҙым.

### Нисек мин китаплы булдым?

"Барыны ла яҡшы буласаҡ!" тип аталған тәүге китабымдың баҫылыуы бик тиҙ һәм алдан уйланылмаған эш булып килеп сыҡты. Был иһә интернет менән бәйле. Көтмәгәндә Башҡорт Википедияһының ирекмәне Рөстәм Нуриев үҙе минең ижадыма иғтибар итеп, 2014 йылдың 21 ноябрь көнө шәхси хат яҙып, Викикитапханаға әҫәрҙәремде тупларға тәҡдим яһаны. Әлбиттә, теләк бар, ләкин бик ҡурҡыныс ине ризалашыуы, сөнки компьютер һәм интернет менән дуҫлыҡ самалы. Ҡурҡыуымды еңеп, бер-бер артлы терәләү, пароль ҡуйыу, шәхси биткә мәғлүмәт ҡуйыу, шаблонға шиғыр урынлаштырып өйрәнеү кеүек беренсе ҡарауға бик ҡатмарлы эштәргә тотондом. Һәр аҙымды, һәр хәрәкәтте Рөстәм Нуриев бик сабыр ғына итеп, йәйләп, ҡат-ҡат аңлатып, ҡулымдан тотоп эшләткәндәй өйрәтте. Электрон китапты үҙе үк эшләп тә ҡуйҙы. Тиҙҙән китапты ҡағыҙ вариантта баҫтырыу ҡулайыраҡ буласаҡ, тип раҫлап, нәшер итеүсе табып, килешеүгә ҡул ҡуйғас, был ысынбарлыҡ икәненә ышандым. Ысынлап та, тиҙ арала китап донъя күрҙе, хатта бик матур итеп исем туйы ла үткәреп ҡуйҙыҡ. Был минең тәүге китабым, һәм уның баҫылып сығыуында башҡорт Википедияһы, уның ирекмәне Рөстәм Нуриев - төп сәбәпселәр, сөнки китап баҫтырыу тигән уй башҡа ла килгән нәмә түгел ине. Шул уҡ интернет селтәре ярҙамында яңы китап республикаһының төрлө райондарына тиҙ генә таралып бөттө, үҙ уҡыусыларын тапты. Нисек тиһегеҙме? Китап баҫтырыу тураһында һүҙ сыҡҡас уҡ минең ижади төркөмөмдә был турала иғлан булды, һәм иң әүҙем уҡыусыларым сығасаҡ китапты үҙҙәре йәшәгән райондарҙа таратыуҙы ойоштороуҙы үҙ өҫтәренә алырға теләк белдерҙе. Тиҙ арала китапты һатып алырға теләүселәр исемлектәре булдырылды, китап сығыу менән (исем туйынан уҡ) райондарға таратып алып та киттеләр. Шуға күрә китапты һатыу менән проблема булманы. Шулай итеп, мин китап сығарып өйрәндем, хәҙер, бер бик танылған әҙип әйтмешләй, шиғыр яҙып өйрәнергә генә ҡалды...

### Хыял емешем

Икенсе китабым - минең хыял емешем. Ҡатын-ҡыҙ тормошондағы дүрт осор: әсәһенә рәхмәтле ҡыҙ бала, һөйөклө ҡатын, балаларына әсәй, ейәндәренә өләсәй - осорҙары сағылыш таба бында ингән шиғырҙарымда. Кеше үҙенең көндәлек тормошонан йәм табып, уның төмен тойоп йәшәһә генә донъяларҙың матурлығын күрә алалыр, тип уйлайым. Был китапты беҙ тормош иптәшем менән икәүләп төҙөнөк: шиғырҙарын һайлап алып, билдәле бер тәртиптә урынлаштырҙыҡ, ул һүрәттәр төшөрҙө, уларҙы ҡуйырға урын билдәләнек. Дизайнер Фәрзәнә Утарбаева минең ике китабымды ла оло зауыҡ менән биҙәне, йәм бирҙе. Ҡулға тотоуҙы ла күңелле булған матур бер китап килеп сыҡты.

Ләкин иң мөһиме - китаптың тышлығы түгел, ә уның йөкмәткеһе: тематикаһы буйынса дүрт циклға бүленгән шиғырҙар йыйынтығы һәр ҡатын-ҡыҙ кисерә торған хистәргә ҡоролған. Беренсе өлөшө "Рәхмәтлемен һиңә, әсәйем!" тип атала һәм донъялағы иң ҡәҙерле кешебеҙгә - әсәйҙәребеҙгә бағышлана. Тере саҡтарында ҡәҙерҙәрен белергә, фатихаларын алып ҡалырға, баҡыйлыҡҡа күскәс, хәтерҙә торорға - шул осраҡта ғына тыныс күңел менән йәшәп, бәхетле булып була икәнен онотроға ярамай. Икенсе өлөш - мөхәббәт, тоғролоҡ, ғаилә тормошо, уртаҡ мәшәҡәттәр һәм шатлыҡтар, ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәттәр тураһында. Өйөндә бәхетле кеше генә тормошта үҙен бәхетле итеп тоя. Өйҙәге бәхет башлыса ҡатын-ҡыҙҙан тора тип иҫәпләйем мин һәм ошо туралағы фекерҙәрем, уй-хистәрем сағылыш тапҡан был шиғырҙарымда. Өсөнсө өлөш - йөрәк ярып сыҡҡан шиғырҙар. Әсәй кеше булараҡ, табыштарым, шатлыҡтарым, әрнеүҙәрем, юғалтыуҙарым, өмөттәрем, хыялдарым - бөтәһе лә бында. Дүртенсе циклда - иң шатлыҡлы, иң хисле, наҙлы шиғырҙарым тупланғандыр, моғайын, сөнки уларҙа мин өләсәй булараҡ сығыш яһайым. Ейәнем - ул минең иң ихлас һөйөүем, дауамым, өмөттәрем һәм хыялым. Ғүмер үтеп, балалар үҫеп, хистәр ҡырыҫланып барғанда ул мине өр-яңынан яратыу хистәре тойорға мәжбүр итте, ихласлығы менән арбаны. Әсәй-өләсәй кешенең бөтә йәшәү мәғәнәһе - балаларҙа. Ғөмүмән, был китапҡа мин үҙемдең иң ҡәҙерле, иң шәхсән хис-тойғоларымды һалып, уҡыусыларыма еткерәм.

### Нимә ул шиғыр?

Йәш саҡта нисектер был турала уйланмай инем. Минеңсә, атлар өсөн уның теорияһын белеү мөһим түгел - һин атлайһың да китәһең. Шуның кеүек, башҡа килгән уй-фекерҙе аҡ ҡағыҙға яҙыу етә ине, шиғыр үҙенәнүҙе килә лә сыға ине. Әле иһә бөтөнләй башҡаса. Йәш саҡтағы шиғырҙарымды уҡып ҡарайым да, үҙем үк аптырап ҡуям: образлылыҡ та бар, фекер ҙә ярылып ята, формаһы ла ярайһы ғына. Бына ошо оҫталыҡты йылдар үтеү менән әллә юғалттыммы, әллә...

Тормош тәжрибәһе мине башҡасараҡ яҙырға өйрәтте. Яһалмалыҡ - шиғриәттең иң ҙур дошманы, минеңсә. Әгәр хистойғоларың ихлас икән, әгәр кешеләрҙе борсоған теманы күтәрәһең икән, әгәр һинең шиғырыңдан кемгәлер еңеллек килә икән, кемдер үҙен борсоған һорауға яуап таба икән - тимәк, был шиғырҙың йәшәргә хаҡы бар! Аҡмулла, Рәми Ғарипов, Мостай Кәримдең бөтә шиғырҙары ла образға ҡоролған тип кем әйтә ала? Ә бит улар шиғриәттең иң юғары өлгөләре иҫәпләнә! Әлбиттә, үҙемде улар менән сағыштырыу дөрөҫ түгелдер... Мин уларҙың ижадына һоҡланам, уларҙан өйрәнәм. Образлылыҡ артынан ҡыуып, яһалма шиғыр яҙыуҙан ҡурҡам. Хистәр йөрәктән шишмә булып урғылып килеп сыҡһа ғына ул ихлас булалыр. Үҙең кисермәгән, үҙең тоймағанды тәбиғи итеп әйтеп биреү мөмкин түгел. Бәлки, ил, тел, милләт тураһында шиғырҙарым аҙ булыуы ла шунан килелер. Яҡшыраҡ, дөрөҫөрәк күренергә тырышып, уҡыусыларымды алдарға теләгем юҡ. Нисек бармын - шулай ҡалам, шулай яҙам. Көнкүреш лирикаһы тип тә атайҙар минең яҙмаларымды. Эйе, бәлки улар шиғриәттең юғары тәғәйенләнешенә, уға булған талаптарға яуап биреп тә бөтмәйҙәрҙер. Ләкин мин бит, улар - шиғыр, йәки шиғриәттең камил өлгөләре, тип иҫбатламайым. Таҡмаҡтың да булырға хаҡы бар, йомаҡтың да, тигәндәй. Һәр төрлө ижадтың да булырға хаҡы бар, минеңсә. Аллаға шөкөр, юғары кимәлдәге шиғырҙар яҙыусы шағирҙарыбыҙ етерлек, өлгө алырлыҡ миҫалдарыбыҙ бар. Әгәр шиғриәттә минең кеүек дилетанттар булмаһа, уларҙың бөйөклөгөн ҡайҙан, кемгә сағыштырып белер ине ябай уҡыусы? Тимәк, минән дә файҙа бар!

**Фирүзә АБДУЛЛИНА.**

*РУХИӘТЕБЕҘ АСЫЛЫ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТ КЕЙЕМДӘРЕН...

## Ишембайға барып күрегеҙ!

**Ишембай милли мәҙәниәттәр үҙәгенең "Юрматы" Йәмәғәт этнография музейының информаторҙары үткән быуаттың үҙгәртеп ҡороу йылдарында уҡ бер мәғлүмәт еткергәйне. Стәрлебаш районының бер башҡорт ауылында бер кеше ислам дине реликвиялары һәм алтын биҙәүестәр менән биҙәлгән ҡумта һатып алған. Был әйбер бер батша чиновнигының туғандарынықы, тип тә әйткәйнеләр. Ишембай районы Этҡол ауылында йәшәгән һәм эшемдә ҙур ярҙам күрһәтеүсе дуҫым Ишғәле Ғәйфулла улы Хөсәйенов үҙенең олатаһы - Аҙнай ауылы сауҙагәре тураһында тағы бер ҡат һөйләне. Әйткәндәй, сауҙагәрҙең эзбизле ҡатламлы таштан төҙөлгән склад);ы әле лә Хажи ауылының ситендә тора.**









*Аристократ (аҡһөйәк) башҡорт ҡатын-ҡыҙы. Модель: Айгөл Нәбикәева.*

Былтыр ғинуар айында баҡыйлыҡҡа күскән дуҫым шуларҙы бәйән итте: революция алдынан ауылдың был бай һәм абруйлы кешеһенең бәләкәй улын сөннәткә ултыртыу йолаһына тирә-яҡтан күп ҡунаҡтар йыйыла. Арбаларҙы ялан ситенә ҡуялар, аттарҙы көтөүлеккә алып сығалар, ә ат сбруйын аҙбарға эләләр. Һуңға тиклем һыйланған ҡунаҡтар арбаларына йоҡларға таралыша. Төндә бәлә була - аҙбар янып китеп, утты һүндерә алмайҙар. Ҡунаҡтарҙың сбруйҙары ла ҡуша яна. Дуҫымдың олатаһы, ул саҡта 40 йәштәрҙәге йәш ир, аптырауға ҡала. Уның эргәһенә юрматы ырыуының аҙнай араһы ҡарттары килә һәм, кәңәшләшкәндән һуң, ҡунаҡтарға тағы ла өс көнгә ҡунаҡҡа ҡалырға тәҡдим итәләр. Ике аҡһаҡал ат менеп, һунар эттәрен эйәртеп, Хажи тарлауығына китә. Улар иртәгәһенә кискә генә ниндәйҙер төргәк күтәреп ҡайта. Шул арала өс арба егеп, ылау Стәрлетамаҡҡа ҡуҙғала һәм ат егеү өсөн кәрәкле сбруйҙар тейәп ҡайта. Ҡалала, ҡайҙандыр йыраҡ ауылдан бер бай сауҙагәр килеп, һатыулашып та тормайынса, бөтөн булған сбруйҙарҙы һатып алған, тигән хәбәр тарала. Шулай итеп, Хөсәйеновтың ҡунаҡтары ла риза ҡала, ырыуҙың абруйы ла нығына, аҙнайҙарҙың байлығы тураһында дан тирә-яҡҡа китә.

Был хикәйәткә һәм башҡорттарҙың йәшерен ерҙәрендә ырыу алтыны булыуы ихтимал, тигән һүҙгә лә ышанырға тура килә. Теге ҡумтаға әйләнеп ҡайтҡанда, музей советы был әйберҙең этнографик темаға ҡағылышы бармы, юҡмы икәнен тикшергәнсе, күп алтын әйберҙәр һатылып бөткәйне. Ҡумтала күп нәмә ҡалмағайны. Улар араһында Колчак һәм Ырымбурҙың Дутов хөкүмәте аҡсалары, башҡорт ғәскәренең указлы муллаһының өс яҡлы мисәте, мировой судья билдәһе, бәләкәй форматтағы Ҡөрьән китаптары, янғын эҙҙәрен һаҡлаған алтын аҡсалар, дини баҫмаларҙың, шул иҫәптән 1905 йылда Өфө губерния типографияһында баҫылған "1936-1903 йылдарҙағы Ырымбур магометан диниәт йыйылышы округы буйынса циркуляр йыйылмаһы һәм башҡа ҡарарҙар" өҙөктәре бар ине. Әммә беҙҙең ҡулдарға эләккән әйбер ҙә уның хужабикәһенең үтә бай икәнен күрһәтә. Реконструкция барышында 400 грамға тиклем ауырлыҡтағы алтын гарнитур килеп сыҡты (фото). Бөтөн әйберҙәр башҡорт милләтенән булған һәм юғары дини ҡатламға ҡараған аҡһөйәк ҡатын-ҡыҙ кейеме икәнен дәлилләй. Ул йәки ғаилә ағзаһы, йәки дини хеҙмәткәрҙең туғаны булырға тейеш. Беҙ милли мәҙәниәткә ҡағылған һорауҙар менән, ғәҙәттә, Ырымбур юлаусылар йортоноң ҡараусыһына мөрәжәғәт итәбеҙ. Ул үҙе башҡорт милләтенән, милли мәҙәниәткә һәм йолаларға һаҡсыл ҡараштағы кеше. Башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт итеүсе дин әһелдәре буйынса күп һорауҙарға ул яуап бирҙе. Был ҡумтаның хужабикәһе ялҡынлы революция йылдарында Дутов-Колчак хөкүмәтенең аҡ казактары контроле аҫтындағы территорияла йәшәгән булһа кәрәк. Һуңынан ғына тыуған яғына ҡайтҡандыр. Ул ҡатындың яҙмышы тураһында бер нәмә лә билдәле түгел. Ә гимназистар һөйләүенсә, башҡорттарҙа борон иң абруйлы ҡатын-ҡыҙҙы һайлау йолаһы булған. Өлкән йәштәге был ҡатын үҙенең биҙәүестәрен туғандарына һәм таныштарына таратып бирә. Уның үҙенә иһә, "бөтөн мир менән" йыйылышып, үҙенсәлекле кейем бүләк ителә. Унда түбәһе ҡаты булған һәм битлекле баш кейеме лә бар.

Табылған мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, 1911 йылда Өфөлә дворян, Башҡорт-мишәр ғәскәренең отставкалағы офицеры, элекке контон начальнигы, мировой судья, мировой аралашсы Солтанов Мөхәмәтйәр Мөхәмәтшәрип улының Бөтөн Рәсәй мөфтөйө вазифаһын башҡарыуына - 25, дәүләт хеҙмәтендә 50 йыл тулыуға арналған тантаналар үтә. Был осорҙа уның ҡатыны Мәрйәм Ислам ҡыҙы, Арыҫланғәле улының ҡатынының исеме Мәрйәм Тимербулат ҡыҙы була. Ҡатынының яҙмышы билдәһеҙ, килендәренең балаһы булмай һәм ул 1928 йылдағы аслыҡ мәлендә үлә. Ошо мәғлүмәттәрҙән дә шуны раҫларға була: беҙ алда телгә алған гарнитур Рәсәй муллалары ҡатындары тарафынан тантаналы сара уңайынан мөфтөй ҡатыны Мәрйәм Солтановаға махсус яһала һәм 1917 йылға тиклем Өфөлә, һуңынан Ырымбурҙа, 1928 йылға тиклем килене Мәрйәм Солтановала Бәләкәй Башҡортостанда һаҡлана. Әлеге мөлдә "аҡһөйәк ҡатын-ҡыҙ кейеме" Ырымбур ҡалаһының коммерция банкыһында һаҡланһа ла, Ишембай ҡалаһының 75 йыллығын билдәләгәндә уны халыҡҡа күрһәтә алдыҡ.

**Владимир БЕССАРЕНКО, "Юрматы" Йәмәғәт этнография музейы хеҙмәткәре.**

*РӘСӘЙ КИНОҺЫ ЙЫЛЫ*

РӘСӘЙ КИНОҺЫ ЙЫЛЫ 2016 ГОД РОССИЙСКОГО КИНО

# ХӘҘЕР ҺИНД ФИЛЬМЫН ДА...

## өйҙә генә ҡарайбыҙ

**"Ауыл клубында фәлән көндә фәлән сәғәттә һинд фильмы күрһәтеләсәк!" Тап ошондай белдереүҙәр һәүетемсә генә йәшәп ятҡан ауыл халҡын йәнләндереп ебәргән. Киноға барыу өсөн балалар кемуҙарҙан йомортҡа хәстәрләһә, йәш ҡыҙҙар ниндәй күлдәк кейеү мәсьәләһе менән баш ватҡан. Ә кисен инде малдарҙы ҡураға бикләгәс, бөтә ауыл клубта көтөп алынған фильм ҡарап рәхәтләнгән...**

Эйе, бынан бер-ике тиҫтә йыл элек кенә булған хәлдәр былар. Хәҙер иһә халыҡты йыйып, клубтарҙа кино ҡарауҙар тарихта ғына тороп ҡалды. Быйыл, Рәсәй киноһы йылы тип иғлан ителгән йылда, тарихта ҡалған шундай мәлдәрҙе хәтерләп алыу өсөн шул йылдарҙың тере шаһиты Хәйбулла районы Үрнәк ауылынан Фәтих олатай Теләүғолов менән һөйләшеп алдыҡ.

- Берәй ҡасан өйөбөҙҙә ултырып ҡына теләгән кинобыҙҙы ҡарай алырбыҙ, тип кем уйлаған? Ул саҡтарҙа ваҡытлыса тип кенә ҡалдырып кителгән кино таҫмаларын, ҡәҙерләп, арбаға һалып алып ҡайтаһың да, кисен халыҡҡа күрһәтеп, кире тапшыраһың, - тип хәтерләй олатай.

- Атайым баянда уйнай, әсәйем менән икәүләшеп йырлайҙар ине. Беҙҙе өйҙә бикләп ҡалдырып, концерт ҡуйырға китә торғайнылар, - тип көлөп хәтерләй ҡыҙҙары Әлфиә Юламанова. Нефтекама, Баймаҡ ҡалаларында үткәрелгән йыр конкурстарында ҡатнашып, лауреат булған Фәтих олатай ятраҡан шөғөлдәре менән бер рәттән Үрнәк ауылында клуб мөдире, киномеханик булып оҙаҡ йылдар эшләй.

- Утыҙ йыл кино ҡуйҙым. "Күсмә кино" тигән нәмә бар ине ул замандарҙа. Бер фильм 2 банканан торҙо, ә уларҙың һәр береһенең ауырлығы - 20-25 кг. Үҙеңдең техникаң юҡ, бригадирҙан бер ауылдан икенсеһенә илтеп ҡуйыр өсөн ат йә машина һорайһың, тракторы ла ярап ҡала...

Киноға ул саҡта халыҡ күп йөрөй ине. Күбеһенсә һинд фильмдарын килтерҙеләр. Халыҡтың да һинд киноһына иҫе китер ине. Өлкәндәр 20 тин, балалар 5 тин түләп, йә булмаһа, йомортҡа биреп инәләр. Ике сериялы булһа, 10 һәм 40 тин. Тап Айнур Аҫҡаровтың "Еңмеш" фильмындағы кеүек инде. Зал шығырым тулы, һыйыш юҡ. Һинд кинолары килһә, клубта ултырырға түгел, баҫып торорға урын ҡалмай. Кешеләр өйҙәренән ултырғыстар тотоп килә торғайны. Һәр кинонең паспорты бар, кешеләрҙе шуға ярашлы ҡарап индерәбеҙ. Фильмда әҙ-мәҙ үбешеү кеүек күренештәр бар икән, 16 йәшкә тиклемге балалар индерелмәй. Ҡайһы бер үҫмерҙәр инәлеп-ялбарып клубҡа индереүҙе һорай. Йәлләп индерәһең инде, мәхрүм ҡалдырып булмай ҙаһа. Кино бөтөп, ҡайтып йоҡларға ятҡансы, сәғәт 12 йә 1 булып китә. Аппарат боҙолһа, шуны йүнәтеп, тағы ла һуңыраҡ ҡайтаһың. Киномеханиктар ай һайын отчет бирә торғайны ул саҡта.

Телевизорҙар сыҡҡас, халыҡ клубҡа кино ҡарарға бик йөрөмәй башланы. План тулмаһа, аҡсаны үҙеңдең кеҫәңдән сығарып һалаһың бит инде. Шулай итеп, яйлап беҙгә, киномеханиктарға ла эш бөттө.

Ә киноларға килгәндә, элеккеләре барыбер шәп ине. Улар эстәлекле, тәрән йөкмәткеле, тәрбиәүи көскә эйә ине. Хәҙергеләренең күбеһендә ireш тә талаш, үлтереш тә атыш - мәғәнәһеҙ фильмдар күп сығарыла. Ауыл ерендә лә 60-80 канал күрһәтеп тора, ҡайһыныһын ғына асма, донъяңды онотоп, бирелеп ҡарарлыҡтары бик аҙ, - ти Фәтих олатай.

Фәтих олатайҙың был фекере лә дөрөҫ: хәҙерге йәш быуын да элекке заман киноларын яратып ҡарай, илһөйәрлек һабаҡтары ала. Ғөмүмән, бөгөн ниндәй кинолар кәрәк беҙгә? Бәлки, кемдәрҙер ошо хаҡтағы фекерҙәрен яҙып ебәрер редакцияға?

**Айгизә АСҠАРОВА.**

**✓ *Был йырҙы "Башҡорт дебет шәле" тип йырлаһаң, дөрөҫөрәк булыр ине. Сөнки "Ырымбур шәле" тигән исем тауарҙың ҡайҙа етештерелеүе хаҡында ғына һөйләй. Ә кем бәйләгәнен уйлап ҡараусы ла булмаған, күрәһең.***

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙӨРӘКТЕ...
## диета ла ауырыта

■ Яуаплы имтихандар, сессия мәлендә барлыҡ студенттар, уҡыусылар бер төн эсендә бар мәғлүмәтте хәтеренә һеңдерергә ярҙам итеүсе саралар тураһында хыяллана. Белгестәр был мәлдә какао эсергә кәңәш итә. Уның файҙаһы тураһында боронғо индеецтар ҙа белгән. Юҡҡа ғына шоколад көслө биостимулятор иҫәпләнмәй. Борон шуға ла мөһим һынауҙар алдынан яугирҙарға какао биргәндәр. Әле лә уҡыусылар араһында шундай фекер таралған, йәнәһе, имтихан алдынан шоколад ашаһаң, баш яҡшыраҡ эшләй. Ысынында иһә шоколад әллә ниндәй файҙа бирмәй, баш мейеһе эшмәкәрлеген әүҙемләштереү өсөн какао эсергә кәрәк. Какао составында теобромин һәм ҙур күләмдә антиоксиданттар бар. Ул баш мейеһе ҡан әйләнешен яҡшырта, һөҙөмтәлә реакция, хәтер, мәсьәләләрҙе хәл итеү яҡшыра, кәйеф күтәрелә, депрессия синдромы юҡҡа сыға. Баш мейеһе өсөн балыҡҡа ҡарағанда, мәҫәлән, емеш-еләктәр ҙә файҙалыраҡ. Бигерәк тә көртмәле, ҡурай еләге, ҡара бөрлөгәндә антиоксиданттар һәм биофлавоноидтар күп. Көртмәле Альцгеймер сирен иҫкәртеүсе булып тора, сөнки баш мейеһенең ҡартайыуы менән көрәшә. Ыңғай сифаттары яғынан ер еләге лә көртмәленән ҡалышмай. Ҡара һәм йәшел сәй ҙә баш мейеһен әүҙемләштерә. Экзотик ризыҡтар араһында авокадоға иғтибар бирергә кәрәк. Унда майлы кислоталар күп, улар ҡан әйләнешен яҡшырта. Авокадо составындағы калий ҙа баш мейеһе эшмәкәрлегенә бик кәрәк.

■ Инфаркт, шәкәр диабеты, стенокардия, ҡан тамырҙары ауырыуҙары дөрөҫ йәшәү рәүешен күҙәтмәү һәм һимеҙлек һөҙөмтәһендә килеп сыға, тип иҫәпләргә күнегеп киткәнбеҙ. Шулай ҙа күп тикшеренеүҙәр үткәргәндән һуң, Шотландия ғалимдары сәләмәтлек өсөн һимеҙ булыу күпкә яҡшыраҡ икәнен раҫлаған. Бер туҡтауһыҙ диеталарҙа ултырып, йә ябығып, йә һимереп йәшәүселәр ғүмер оҙайлығын 25 процентҡа ҡыҫҡарта икән. Сөнки был йөрәк һәм ҡан тамырҙары сәләмәтлегенә насар йоғонто яһай, был саҡта йөрәк өйәнәгенән үлеү хәүефе 30-90 процентҡа арта. Ғалимдар был күренеште йо-йо эффекты тип атаған. Йо-йо эффекты онкологик сирҙәргә лә килтерә.

■ PLOS ONE журналы яҙыуынса, ир-егеттәргә ҡатын-ҡыҙҙарҙың хис-тойғоларын аңлауы ныҡ ҡыйын. Индиана университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, гүзәл заттың йылмайыуын да ир-егет дөрөҫ аңламай. Һынауҙарҙа 21 йәштән 52 йәшкә тиклемге 22 ир-егет ҡатнашҡан, улар магнит-резонанс томография ярҙамында тест үткән. Был ысул мейенең әүҙемлеген билдәләргә мөмкинлек бирә. Уларға күҙҙәр төшөрөлгән һүрәттәрҙе ҡарап, уларҙа ниндәй тойғолар сағылыуын белергә кәрәк булған. Фотоларҙа кеше хис-тойғоларының бөтөн спектры - ыңғайы ла, киреһе лә сағылған. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, ир-егеттәргә ҡатын-ҡыҙҙың тойғоһон аңлар өсөн күп ваҡыт кәрәк. Етмәһә, фотола ир-егеттең күҙҙәре һүрәтләнгән саҡта уларҙың баш мейеһенең хистәр менән бәйле өлөшө әүҙемләшеп киткән. Ир-егеттәр ҡатын-ҡыҙҙарҙың күҙенә ҡарағанда баш мейеһенең хис-тойғолар һәм ҡылыҡтар менән бәйле өлөшө ныҡ әүҙемләшмәгән. Ғалимдар билдәләүенсә, көслө зат ҡатын-ҡыҙҙың тойғоларын насар "уҡый", етмәһә, улар үҙҙәренең зат вәкилдәренең тойғоларына мәрхәмәтлерәк икән.

МАҠСАТҺЫҘ ДОНЪЯ ҺАНҺЫҘ

# ЫРЫМБУР ШӘЛЕМЕ, ӘЛЛӘ БЕҘҘЕКЕМЕ?

**Һуңғы ваҡытта йәш егет-ҡыҙҙарыбыҙ милли мәҙәниәтебеҙгә, боронғо йолаларыбыҙға бәйле проекттар ижад итә башланы. Кемдер эшҡыуарлыҡҡа тик аҡса һуғыу өсөн тотонһа, икенселәр тотош халыҡ өсөн әһәмиәтле булған тармаҡта кәсеп итә. Тап шундай мөһим өлкәлә эш башлаусы, йәғни "Башҡорт шәле" проектын тормошҡа ашырыусы Илнур Хужахмәтов һәм Айҙар Камаев менән әңгәмәбеҙ.**

**➔ Һәр эштең йәки идеяның авторы була. "Башҡорт шәле" проекты булдырыу уйы нисек тыуҙы?**

**Илнур:** Мин Ейәнсура районының Яныбай ауылында тыуып үҫтем. БДУ-ның география факультетында магистратурала уҡыйым. Уҡыуҙан тыш, фотоға төшөрөү менән мауығам. "Бәйләнештә" сайтында үҙемдең ижадыма бәйле сәхифә эшләнем. Әлеге көндә төрлө мәҙәни сараларҙа фотоаппарат тотоп, сәхнә алдында улай-былай йүгереп йөрөгән оҙон буйлы кешене күрһәгеҙ - шул мин булам инде. Никах, туй һәм башҡа байрамдарҙа фотограф сифатында бер аҙ аҡса ла эшләйем. Ә дебет шәлдәр - күңелгә яҡын тема. Беҙҙә, Ейәнсурала, бар ҡатын-ҡыҙҙар ҙа тиерлек шәл бәйләү менән шөғөлләнә. Шулай уҡ минең әсәйем өсөн дә был эш төп кәсептәрҙең береһе. Бала саҡтан уға кәзә мамығы тарашырға, мамыҡ иләшергә лә ярҙам итергә тура килә торғайны. Үҙем дә бәйләп ҡарағаным бар шәлде. Хатта бер мәл йөн-энәләр менән булышып ултырғанымды күреп, атайым ҡулыма балта тотторол китте... Ир-егеттәр эшенә өйрәнһен тигәндер инде.



**Айҙар:** Ә мин Бишбүләк районынан. Өфөлә Республика башҡорт лицей-интернатында уҡыным, әлеге ваҡытта БДУ-ла белем алам. Башҡорт асыҡ КВН лигаһын ойоштороу комитеты ағзаһымын. Беҙ башҡортса шаяртабыҙ һәм шуның менән башҡорт телен популярлаштырабыҙ. Баш ҡалабыҙҙағы башҡорт йәштәре менән аралашҡанда төрлө йүнәлештәге идеялар өҫтөндә эшләйбеҙ. Ул идеялар халҡыбыҙға, йәштәргә йәки берәй кәсеп төрөнә ҡағылышлы була һәм беҙ ошо тәңгәлдә үҙ-ара кәңәшләшәбеҙ, кәрәк саҡта, бер-беребеҙгә ярҙам итәбеҙ. Шулай бер көндө Илнур дебет шәлдәр тураһында һүҙ сығарҙы. Шәлде бәйләүе ауыр, әммә улар арзан хаҡҡа һатыла икәнен белдем шул аралашыуҙа...

**➔ Һеҙ ни өсөн проектығыҙҙы "Башҡорт шәле" тип атанығыҙ? Тауарҙы мәҫәлән, мамыҡ йәки дебет шәл тип тә атап булыр ине...**

**Айҙар:** Беҙгә, башҡортлоҡҡа бәйле берәй идея көҫәп йөрөгән кешеләргә, шәл менән шөғөлләнеү уйы оҡшап ҡалды. Иғтибар иткәнегеҙ бармы икән, сит ил компаниялары, хәҙер инде беҙҙекеләр ҙә, үҙ тауарын һатыуға сығарғанда етештереүселәрҙең унар йыллыҡ тарихына, ҡулланыусыларҙың был тауар менән ҡәнәғәт булыуына баҫым яһай. Йәнәһе лә, беҙ күптән таныш, беҙ һеҙгә дуҫ, тигәнде әйтергә, тауарҙарҙың оҙаҡ хеҙмәт итәсәген дәлилләргә тырышалар. Ә шәлгә килгәндә, ошо уҡ маркетинг алымын ҡулланып булмаймыни? Был тауар бит халыҡҡа нисә быуат таныш һәм көнүҙәклеген юғалтмай. Тимәк, уның абруйында ла шик тыумай.

**Илнур:** Шәл - мәҙәниәтебеҙҙең күркәм бер күренеше. Тарихи яҡтан нигеҙләргә лә мөмкин. Боронғо Ырымбур губернаһының Орск өйәҙе башҡорт халҡы йәшәгән ерҙәр. Гай, Ҡыуандыҡ яҡтарында әле лә башҡорт ауылдары бар. "Ырымбур мамыҡ шәле" тип йырлай урыҫтар. Был йырҙы "Башҡорт дебет шәле" тип йырлаһаң, дөрөҫөрәк булыр ине. Сөнки "Ырымбур шәле" тигән исем тауарҙың ҡайҙа етештерелеүе хаҡында ғына һөйләй. Ә кем бәйләгәнен уйлап ҡараусы ла булмаған, күрәһең.

Беҙҙең крайҙы өйрәнеүселәр П.И. Рычков һәм С.И. Руденко килтергән мәғлүмәттәргә ярашлы, башҡорттар кейеҙ һуғыу, дебет шәл бәйләү менән күпләп булышҡан. Бындай эш күсмә тормош алып барыусы ҡалмыҡ, ҡырғыҙ халыҡтары менән йәнәш йәшәү дәүерендә үк алып барылған. Аҙаҡ, 18-се, 19-сы быуаттарҙалыр инде, башҡа халыҡтар күпләп килеп ултырғас, шәл бәйләү эше тағы ла нығыраҡ үҫешкән. Сөнки ситтәр сигеү, семәрләү эшенең яңы алымдарын алып килгән һәм тәжрибәләре менән уртаҡлашҡан. Хәҙерге шәлдәрҙә күргән семәрҙәр уртаҡ эшмәкәрлек емешелер, моғайын. Ҡыҙыҡлы факттар ҙа етерлек. Мәҫәлән, Екатерина Икенсе батшалыҡ иткән осоронда Ырымбурға килгән. Унда бер оҫта батшабикәгә дебет яулыҡты балдаҡ эсенән үткәреп күрһәткән. Йәнәһе лә, ҡулдан эшләнгән мөғжизә. Шундай сифатлы дебет-мамыҡ биргән кәзәләр тоҡомоноң беҙҙең яҡтарҙа ғына аҫыралыуы тураһында ла әйтеп китергә мөмкин. 19-сы быуатта "Ырымбур шәлдәре" тигән атама дан яулағас, шәл бәйләү оҫталары донъя буйлап күргәҙмәләргә йөрөй башлаған. Шул саҡ французлар, үҙҙәрендә был тауарҙы етештереүҙе яйға һалыу маҡсатында, беҙҙең яҡтың кәзәләрен тыуған илдәренә алып ҡайтҡан. Әммә күп тә үтмәгән, кәзәләрҙән алған дебет сифаты насарая башлаған. Французларҙың ниәте бойомға ашмаған. Баҡтиһәң, бары тик беҙҙең яҡтарҙа ғына малдар шундай ҡалын дебет бирә ала икән...

**➔ Эште башлауы иң ауыры, тиҙәр... Һеҙҙең ниәттәрегеҙ алдында ниндәй ҡыйынлыҡтар осраны? Шәл бәйләү эшен нисек, кем башҡара, әллә кистәрен үҙегеҙ ултырып бәйләйһегеҙме?**

**Айҙар:** Эшләй башлауыбыҙға 2-3 ай ғына әле. Маҡтанырлыҡ ҡаҙаныштарыбыҙ юҡ. Әлегә эшләгән эшебеҙ шул: проектҡа логотип эшләтеп алдыҡ. Бынан һуң, тауарҙы матур итеп күрһәтеү өсөн модель булырҙай ҡыҙ таптыҡ һәм фотосессия үткәрҙек. Аҙаҡ ҡына интернет селтәрендә рекламаға күстек. Әлдә шул "Бәйләнештә" сайты бар. Дуҫтар, улар идара иткән төркөмдәр "Башҡорт шәле" исемен таратыуҙа тос өлөш индерҙе.

**Илнур:** Хәҙер Ейәнсурала етештерелгән тауарҙарҙың төп дистрибьюторына әйләнеп барабыҙ. Районда бит шәлде интернет аша һатыусылар бик әҙ. Беҙҙең өлкән быуын сауҙаны таныш-белештәр аша алып барырға күнеккән. Йә булмаһа, ҙур булмаған магазин-бутиктарға мөрәжәғәт иткән булалар. Ә беҙ шәлде бер дөйөм исем аҫтында тотош Башҡортостанға сығарырға уйланыҡ.

**➔ Ярай, исем булдырҙығыҙ, бәләкәй булһа ла ниндәйҙер тауар әйләнеше лә бар. Ә артабан нисек үҫешергә уйлайһығыҙ?**

**Айҙар:** Киләсәккә пландар бихисап. Ҡайһылары тормошҡа ашыр - әйтеүе лә ҡыйын. Сауҙа, баҙар шарттарында һатып алыусыларҙың ихтыяжын ҡәнәғәтләндерлек тәҡдимдәр яһарға кәрәк. "Башҡорт шәле" тип яңғырауыҡлы исем алыуыбыҙ ғына ла беҙҙең иңгә ҙур яуаплылыҡ йөкмәтә. Хәҙер бит шундай заман, йоҡлап ятһаң, исемеңде лә, есемеңде лә тартып алырға әҙер генә торалар. Шуға күрә, иң башта "Башҡорт шәле" атамаһын патентларға, аҙаҡ шәлде сит илдәргә сығарырға уй бар.

**Илнур:** Атама тураһында дауам итәм. Бына, ҡарағыҙ, Ырымбур шәле атамаһы Рәсәйҙә киң билдәле. Ул исем, әйҙә, йәшәһен, беҙгә ҡамасауламай. Хатта ярҙам да итә, тип әйтергә була. Сөнки уйлап ҡараһаң, тап ошо брендты артабан үҫтереү маҡсатында 20-се быуатта ла эш алып барылған. Мәктәптәрҙәге түңәрәктәрҙә шәл бәйләү эшенә, төрлө семәрҙәргә ныҡлап өйрәнеп ҡалған бөгөнгө оҫталар. Ә инде уларҙың тупланған тәжрибәһен иһә киләһе быуындарға тапшырырға ғына ҡала. Беҙҙең "Башҡорт шәле" проектының йүнәлештәренең береһе лә шул. Хәҙерге заманда шәл бәйләү, кейеҙ баҫыу, балаҫ һуғыу кеүек халыҡ һөнәрҙәрен, ҡул эштәре тармағын юғалтмаҫҡа, киләһе быуындарға еткерергә кәрәк. Тарих та бит ҡабатланып тора, тиҙәр. Шундай милли мираҫ булып торған әйберҙәрҙе пропагандалау шәл бәйләү курстары асылыу менән үрелеп китһә, бигерәк тә шат булыр инек.

**Рәшит ТАЙБУГИН**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ *Ағинәйҙәр ҡорҙарының бына шулай бер-береһенә ҡунаҡҡа йөрөшөп, теге йәки был эштәре менән таныштырыуы бик тә мөһим. Улар шулай үҙ эшмәкәрлектәрен киңәйтә, тәжрибәләрен байыта.*



АҒИНӘЙҘӘР ҠОРО

**Һуңғы йылдарҙа республикабыҙ районадарында һәм ауылдарында ойошҡан ағинәйҙәр хәрәкәтенең әһәмиәтен, милләт яҙмышындағы мөһимлеген танымау мөмкин түгел. Миһырбанлы, һиҙгер, зиһенле, аңлы, зыялы ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауылдарыбыҙға, көнитмешебеҙгә, рухиәтебеҙгә янаған заман һынауҙарына ҡаршы ҡалҡан булып баҫыуы дәүерҙең бер шаңдауын хәтерләтә хатта. Хәйер, халҡыбыҙҙа был хәрәкәт яңылыҡ та түгел инде. Ағинәйлек, аҡһаҡаллыҡ йәшәү рәүеше булып тора беҙҙең башҡорт йәмғиәтендә. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡарамағындағы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы, ауыл-ҡалаларыбыҙҙағы битараф булмаған зыялы ҡатын-ҡыҙҙарҙы бер ҡорға берләштереп, уларҙың эшенә бер рәсми төҫ кенә бирҙе. Йөрәгендә ағинәйлек ҡомары йөрөткәндәр бөгөн Баймаҡ, Әбйәлил, Учалы, Хәйбулла, Йылайыр, Белорет, Ейәнсура, Күгәрсен, Федоровка, Стәрлебаш, Ғафури, Архангел, Ауырғазы, Әлшәй, Дәүләкән, Миәкә, Бишбүләк, Асҡын, Бүздәк, Ҡыйғы, Иглин, Борай, Салауат, Дүртөйлө, Мәләүез, Ишембай, Стәрлетамаҡ райондарында, Сибай, Күмертау, Өфө ҡалаларында дәррәү эшләп килә. Байрам менән байрам, сара менән сара араурығында ғына осрашмай был гүзәл заттар, ә ағинәйлек бурысын атҡарыуҙы көндәлек эш, йәшәү рәүеше итеп ҡабул иткән улар. Шуға ла уларҙың һәр эшен, һәр үткәргән сараһын матбуғат биттәрендә яҡтыртып бөтөп тә булмай. Ә шулай ҙа үтә мөһимдәрен, башҡаларға өлгө, тәжрибә бирерлектәрен гәзитебеҙ биттәрендә күрһәтә бармаҡсыбыҙ.**

# ИЗГЕ ЭШТӘРЕ...

## дәүерҙең бер шаңдауы булһын

### Йолалар сыҡты сәхнәгә

Ейәнсура районында үткәрелгән ҡор "Ағинәйҙәр һүҙе - изге доға ише" тип аталды. Йола буйынса, ҡорҙо район хакимиәте башлығы урынбаҫары Рауил Ҡунаҡбаев асып ебәрҙе. Ул ҡайһы бер мәғлүмәттәргә нигеҙләнеп, район ағинәйҙәре эшмәкәрлегенә ыңғай баһа бирҙе, уларҙың эше һөҙөмтәһе булараҡ, төбәктә ҡайһы бер кире күренештәрҙең, бигерәк тә эскелек менән мауығыусыларҙың кәмеүе, ауылдарға йәм инеүе тураһында хәбәр итте. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың энтузиазмына ғына нигеҙләнеп башланған был хәрәкәттең әһәмиәте етәкселәр тарафынан шулай хуплана, билдәләнә икән, тимәк, юҡҡа тырышмай ағинәйҙәр, тигән һығымта яһалды ошонда.

Артабан милли йолалар сыҡты сәхнәгә. Ағинәйҙәрҙең бер маҡсаты ла ошо бит: йолаларыбыҙҙы иҫкә төшөрөп, йәш быуынға тапшырыу. Ейәнсура районы Ағинәйҙәр ҡоро етәксеһе Нурия Ҡунысбаева үҙе алып барҙы сараның был өлөшөн, ағинәйҙәр башҡарған эштәрҙе барланы, уларға баһа бирҙе, күңелдәрен үҫтерҙе. Уның матур телмәренән һуң сағыу милли кейемдәге ағинәйҙәр сиратлап сәхнәгә күтәрелде. Яныбайҙар баланы имләү, өшкөрөү йолаһын ана нисек йәнле итеп сәхнәләштерҙе! Аҡҡондоҙҙарҙың ҡорама байрамы ваҡытында "Бирнәне алтыла әҙерләһәң - арта, етелә әҙерләһәң - етмәй" тигән һүҙҙәрендә ни тиклем тәрән мәғәнә ятыуына иғтибар ителде. Үргендәр, муйнаҡтар йырлы, шиғырлы сығышы менән арбаһа, иҫәнғолдар: "Батшаларға миһырбанлыҡ, илйортҡа именлек бирсе, Аллаһы Тәғәлә", - тип, бала тыуған ваҡытта әйтелә торған йолаларға мөрәжәғәт итте. Ә килендәргә ниндәй матур теләктәр әйтте улар! Ҡыуаныстан күҙгә йәштәр эркелә: "Килен, алғы итәгенде - бала, артҡы итәгеңде мал баҫһын!" Йөрәккә үткәреп теләк әйтә белеү ҙә - милләтебеҙ йолаларынаң бер күрке.

Бикбауҙар ыуыҙ ҡоймағынан ауыҙ иттерһә, сәғиттәр килендән һыу юлы башлатты. Фәүзәнә ағинәйҙең йыры халыҡсан моңдоң бер аҫыл өлгөһө булараҡ хәтерҙә ҡалды. Тормош бер ҡасан да еңел-елпе булмаған, әммә үҙенең эс бошоуын да, һыҙланыуҙарын да йыр менән йырып сыҡҡан башҡорт ҡатыны. Иҙәштәр мах бирмәй йәшәргә саҡырһа, Әбүләис ағинәйҙәре, яҡташтары Мәрйәм апай Бураҡаеваның фекерҙәренә таянып, "Арғымаҡ"лы милләт булайыҡ, тип саҡырҙы. Ибрай ағинәйҙәренең Кесе йыл байрамы, мәҫәлән, үҙенсә бер асыш һымаҡ та булды. Баҡтиһәң, ул кәбисә йылының һуңғы шаршамбыһында үткәрелә икән.

Үтәғол ауылы ағинәйҙәре үткәндәргә байҡау яһап, үҙҙәренә милли күлдәктәр бүләк иткән шағирә, БР Дәүләт Йыйылышы- Ҡоролтай депутаты Йомабикә Ильясоваға бағышлап таҡмаҡтар ҙа әйтте. "Ейәнсура һылыуҡайы-2015" исеменә лайыҡ булған Наҙгөл Әйүпова Альбина Шәмсетдинованың киң билдәле "Башҡорт улына" йырын башҡарып, залдағыларҙы рухландырып ебәрҙе. Шиғыр, йыр ярата шул Ейәнсура халҡы.

Беҙҙең халыҡта бындай күркәм байрамдар ҡунаҡтарһыҙ үтмәй. Был юлы ейәнсуралар сараға күршеләрен - Күгәрсен районы ағинәйҙәре ҡоро ағзаларын саҡырғайны. Уларҙың етәксеһе Әминә Әҙелғужина сәхнәгә күтәрелеп, үҙҙәренең эш тәжрибәһе менән уртаҡлашты. Әйткәндәй, ағинәйҙәр ҡорҙарының бына шулай бер-береһенә ҡунаҡҡа йөрөшөп, теге йәки был эштәре менән таныштырыуы бик тә мөһим. Улар шулай үҙ эшмәкәрлектәрен киңәйтә, тәжрибәләрен байыта. Бына, мәҫәлән, Күгәрсен районы ағинәйҙәренең милли кейемдәргә ихтыяжын иҫәпкә алып, уларҙың етәксеһе Әминә Әҙелғужина шәхси ателье асып ебәргән. Ейәнсура ағинәйҙәре был мәғлүмәтте шулай уҡ ыңғай ҡабул итте: милли күлдәк тектерергә Өфөгә түгел, ә күрше районға ғына барырға була бит хәҙер...

Ейәнсуралағы был сара залға йыйылыусыларҙы рухландырып ҡына ҡалманы, ә миллилеккә һөйөү уятты, күп йолаларҙы иҫкә төшөрҙө һәм... күптәрҙә ағинәйҙәр менән бергә иңгә-иң терәшеп эшләргә тотонорға тигән дәрт уятты. "Ҡара әле, өләсәйемдән ишеткән анау яҙҙы ҡаршылау йолаһын барып өйрәтәйем әле ағинәйҙәребеҙгә, бәлки, мине лә үҙ сафтарына алырҙар..." - тип һөйләнә-һөйләнә сығып барған апайҙың һүҙҙәре быға раҫ булды.

**Лариса АБДУЛЛИНА.**
**(Дауамы бар).**



УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Бишенсе сер: мин дә, һин дә ғәйепле түгел

### Ғәйептең ете төрө

**"Ата-әсә - бала" бәйләнешендәге ғәйеп.** Бала саҡта ғәйеп тойғоһон ололар, атап әйткәндә, ғаиләгеҙ тойорға мәжбүр итә. Ахырҙа, ғәйеп тойғоһо уларға файҙаға булһа, һеҙгә лә файҙалы буласаҡ! Ҡасандыр кемгәлер ниндәйҙер ғәмәлегеҙ оҡшамай икән, һеҙгә "насар ҡыҙ", "насар малай" тиҙәр. Ололар һеҙҙең ғәмәлдәрегеҙгә түгел, ә үҙегеҙгә субъектив баһа бирә. Тормошоғоҙҙоң тәүге йылдарында, бигерәк тә беренсе биш йылында һеҙҙе яҡшы һәм насар, дөрөҫ һәм яңылыш нәмәләргә реакция күрһәтеүгә программалайҙар. Ғәйеп тойғоһо маҡтау һәм яза биреү аша һеңдерелә. Тап шул осорҙа үҙегеҙҙе ғәмәлдәрегеҙ менән күҙаллай башлайһығыҙ. Ата-әсә балаларҙы контролләү өсөн махсус рәүештә ғәйеп тойғоһон файҙалана. Бындай осраҡта түбәндәге фразалар ҡулланыла: "Күршеләр ни уйлар?", "Һин беҙҙе уңайһыҙ хәлгә ҡуйҙың!" һ.б. Был исемлекте әллә күпме дауам итергә була. Ата-әсәгеҙҙә саҡ ҡына ҡәнәғәтһеҙлек тыуҙырһағыҙ, улар шунда уҡ ошо ҡоралды файҙалана башлай. Шуға күрә һеҙҙә, ғәйеп тойғоһо кисермәҫ өсөн, тирә-яҡтағыларға ҡәнәғәтлек килтереү моделе нығына. Һеҙ башҡалар нимә ишетергә теләй - шуны һөйләйһегеҙ, башҡалар нимә талап итә - шуны эшләйһегеҙ. Һеҙҙе, ҡулайлашып, башҡаларға яҡшылыҡ эшләйһегеҙ, тигәнгә ышанырға мәжбүр итәләр. Бына шулай яҡшы тәьҫир ҡалдырырға тырышыу ихтыяжы тыуа ла инде.

**"Бала - ата-әсә" пары.** Был системала балалар ғәйеп тойғоһон бик йыш ололар менән идара итеү өсөн файҙалана. Күбебеҙ яҡшы ата-әсә булырға теләй һәм балаһының, мине яратмайҙар, тип уйлауын кисерә алмай. Идара итеү өсөн бала: "Һин мине яратмайһың!", "Шуның ата-әсәһе уға шуны-шуны эшләргә рөхсәт итә!", ти. Был осраҡта балалар ата-әсә эшләмәгән нәмәләрҙе иҫенә төшөрөп, уларҙы ғәйеп тойғоһо кисерергә мәжбүр итә. Бындай тәртип өлгөһөн балалар ололарҙан күреп өйрәнә. Ул был механизмдың нисек тәьҫир иткәнен белмәй, әммә үҙендекен раҫлау һәм теләгәненә өлгәшеү өсөн иң һөҙөмтәле ысул икәнен яҡшы аңлай. Сөнки манипуляция балалар өсөн ҡыҙыҡлы, уның асылын аңлау өсөн артыҡ ваҡыт кәрәкмәй. Белеүегеҙсә, ғәйеп тойғоһо - ситтән алынған реакция. Ул балаларҙың тәбиғи тәртибе түгел. Әгәр балағыҙ һеҙҙең менән идара итергә теләй икән, шикләнмәгеҙ, ул был ысулды яҡшы уҡытыусынан - һеҙҙән өйрәнгән!

**Яратыу аша ғәйеп тойғоһо.** "Әгәр һин мине яратһаң..." - мөхәббәт мөнәсәбәттәрендә партнерың менән идара итеү өсөн киң таралған фраза. "Әгәр һин мине яртһаң, шуны-шуны эшләр инең", тибеҙ икән, уны: "Әгәр шуны-шуны эшләргә теләмәһәң, үҙеңде ғәйепле той!" йәки "Әгәр баш тартһаң, төкөрөп бирҙем мин һиңә!" тип аңларға кәрәк. Үҙебеҙҙең битарафһыҙлығыбыҙҙы күрһәтеүгә программаланғанбыҙ икән, шундай фразалар аша беҙҙең менән еңел генә идара итәсәктәр. Әгәр улар тейешле йоғонто яһамай икән, өндәшмәү, енси бәйләнештән баш тартыу, үсегеү, асыуланыу, илау, истерикаға бирелеү кеүек тактикалар ҡулланырға мөмкин.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

✓ Дөгө орлоғонон ебетергә һалғанда крахмалы сығып бөтә һәм буш күҙәнәктәр ҡала. Бындай дөгө абсорбент кеүек эшләй һәм ошо рәүешле дауаланыу курсы үтеүсенең сәләмәтлеген нығыта, кешене йәшәртә, бил ауыртыуы бөтә.



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# КӨЛӨП-ЙЫЛМАЙЫП ЙӘШӘЙЕК!




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**13-сө һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Ямантау. Тәхет. Испания. Ҡыяр. Ҡырҡты. Ядро. Мут. Ауыҙ. Ше. Башлыҡ. Айғыр. Утрау. Мулдаҡ. Бородино. Сыбаркүл. Нева. Лувр. Илгә. Нюди. Еңел. Еҙем.
**Вертикаль буйынса:** Янғантау. Ҡырпағай. Ребаб. Ирәмәл. Ағиҙел. Уор. Автопортрет. Үләнле. Нөгөш. Иглу. Таяҡҡа. Модернизм. Шүлгән. Ҡыҙыл. Ырғаҡ. Ҡына.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**9 апрель "Йәнем, иртәгә яңы көн тыуыр"** (Я. Пулинович), драма
**10 апрель "Йософ һәм Зөләйха"** (Ҡол Ғәли, Ю. Сафиуллин инсц.), музыкаль риүәйәт

**М. Горький исемендәге Ырымбур дәүләт өлкә драма театры гастролдәре**

**11 апрель "Ричард III"** (У. Шекспир), трагедия
**12 апрель "Милые люди"** (В. Шукшин), лирическая комедия
**13 апрель "Свадьба в Малиновке"** (Л. Юхвид, М. Авах, В. Типот), музыкальная комедия
**14 апрель "Грибной царь"** (Ю. Поляков), драма
**15 апрель "Братишки"** (Р. Куни, М. Куни), комедия

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**15 апрель "Акса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**11 апрель "Йәшәү йәмем йырҙарҙа"** Искәндәр Ғәзизовтың концерты
**13 апрель "Если радость на всех одна"** Башҡортостандың халыҡ артисы, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Нәзифә Ҡадырова концерты. Рәсәй киноһы йылына арнала.
**15 апрель** Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, "Далан" фольклор-эстрада төркөмө солисткаһы **Миңзифа Исҡужина** менән Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры солисткаһы **Гөлнур Нарынбаева "Күңелдәрҙә яҙ"** исемле программаға саҡыра.

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**13 апрель "Йырҙарым - күңел нурҙарым" "Ашҡаҙар"** башҡорт эстрада-фольклор төркөмө концерты. Филармонияның 25 йыллығына арнала
**14 апрель** М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры гастроле **"Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

## Салауат дәүләт башҡорт театры

**13 апрель** М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры гастроле **"Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама
**15 апрель "Мөхәббәт күле"** (М. Багаев), комедия

*ИҒЛАН*

Диплом серии ВСГ №4758928 и приложение к нему, выданный Башкирским государственным университетом в 2010 году на имя Гарипова Артура Азатовича, считать недействительным в связи с утерей.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Апрель (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 11 (4) дүшәмбе | 4:54 | 6:24 | 13:30 | 18:40 | 20:10 | 21:40 |
| 12 (5) шишәмбе | 4:52 | 6:22 | 13:30 | 18:42 | 20:12 | 21:42 |
| 13 (6) шаршамбы | 4:50 | 6:20 | 13:30 | 18:44 | 20:14 | 21:44 |
| 14 (7) кесе йома | 4:47 | 6:17 | 13:30 | 18:46 | 20:16 | 21:46 |
| 15 (8) йома | 4:45 | 6:15 | 13:30 | 18:48 | 20:18 | 21:48 |
| 16 (9) шәмбе | 4:42 | 6:12 | 13:30 | 18:50 | 20:20 | 21:50 |
| 17 (10) йәкшәмбе | 4:40 | 6:10 | 13:30 | 18:52 | 20:22 | 21:52 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ*

# ОРГАНИЗМЫҢДЫ ТАҘАРТЫП АЛ!



Организмды Тибет ламалары алымы буйынса зыянлы матдәләрҙән таҙартыу өсөн үҙеңә нисә йәш, шунса ҡалаҡ дөгө ярмаһын һанап һалып йыуырға. Таҙартылған ярманы банкаға һалып, өҫтөнә ҡайнаған йылы һыу ҡойоп, ҡапҡас менән ябып ултыртып ҡуйырға. Иртәнсәк дөгөнөң һыуын түгеп, ярманы бер ҡалаҡҡа өймәләмә итеп алып, тоҙ һалмайынса, 3-4 минут тирәһе бешерергә. Был дөгөнө сәғәт иртәнге һигеҙенсе яртынан алда ас ҡарынға ашағандан һуң, өс сәғәт бер нәмә лә ашамай һәм эсмәй торорға кәрәк. Банкала ҡалған ебетелгән ярмаға тағы ла ҡайнаған йылы һыу ҡойоп, һыуытҡысҡа ҡуйырға. Дөгө бөткәнсе көн дә ошо процедураны ҡабатларға. Был ысулдың сере шунда: дөгө орлоғононоң структураһы кристалл, уны ебетергә һалғанда крахмалы сығып бөтә һәм буш күҙәнәктәр ҡала. Бындай дөгө абсорбент кеүек эшләй һәм ошо рәүешле дауаланыу курсы үтеүсенең сәләмәтлеген нығыта, кешене йәшәртә, бил ауыртыуы бөтә.

✓ *Әлдексә йырҙарҙың милли сәнғәтебеҙҙең бәсен, йырсыларҙың абруйын төшөрөүсән яҡшы тоя ул. Йәш йырсыларҙың ике-өс һүҙҙе ҡабатлай-ҡабатлай сәхнә буйлап йүгереүсән ваҡытлыса дан артынан сабыуға тиңләй.*

ИЖАДХАНА

# УНЫҢ ДАНЫ - ИХЛАСЛЫҒЫНДА



**Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Баязит Байназаров үҙе эшләгән Сибай концерт-театр берекмәһендә һәм Сибай ҡалаһында ғына түгел, тотош республикабыҙҙа сәнғәт һөйөүселәргә яҡшы таныш йырсы. Уның тыумыштан бирелгән таланты, күңел түренән урғылған аһәңле моңо күптәрҙе әсир итә һәм үҙенә арбай.**

...Иҫ китмәле хозур тәбиғәтле Бөрйән районының Яуымбай ауылында буй еткерә буласаҡ йырсы. Ҡайынөй йылғаһының һыуын эсеп, Шәрифә тауы һәм Олотау тауҙарының итәгендә уйнап үҫкән егет бөгөн Сәнгелде буйҙарында ҡолас киреп бесән сапҡан мәлдәрен татлы бер төш кеүек кенә хәтерләй. Ике малай һәм ике ҡыҙ үҫәләр улар ата йортонда. Атаһы Рәмзи ағай мәрхүмдең ҡурҡаҡ тултырып һуҙған "Һандуғас", "Илсе Ғайса", "Раушаниям, бәгерем" һ.б. йырҙарын әҫәрләнеп тыңларға ярата Баязит. Әммә уны милләтебеҙ ғорурлығы, башҡорттоң айырылмаҫ моңдашы булған ҡурай нығыраҡ әсир итә. Шуғалыр ҙа, бәләкәй Баязит, үҫкәс, үҙен ҡурайсы итеп күҙ алдына килтерә. Айырым бер дәрт һәм илһам менән ҡурайҙа уйнаған малай мәктәп һәм район бәйгеләрендә призлы урындар яулай, үҙенең уныштары менән ҡанатлана. Әле башланғыс синыфтарҙа ғына уҡып йөрөгән һәм бейеүсе булараҡ танылып өлгөргән малайҙың был һәләтен атай-әсәһе һәм уҡытыусылары ла хуплай. Ә урта синыфтарҙа инде һәләтле үҫмер үҙен йырсы булараҡ та таныта.

Тәү тапҡыр йыр менән сәхнәгә сыҡҡан көнөн кисә генә булған кеүек хәтерләй Баязит: ауыл клубында 8 Март - Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнөнә арналған ҙур концерт бара. Ҙур тулҡынланыу менән йырлай башлаған үҫмер беренсе куплеттан һуң, артабанғы һүҙҙәрен онотоп, ҡаушап ҡала һәм сәхнән сығып китергә мәжбүр була. Ә клуб тулы халыҡ гөж килеп ҡул саба, уның янынан сәхнәгә сығыуын талап итә. Шулай итеп, тәү башлап сәхнәнән йырлаған "Һыу буйынан әсәй ҡайтып килә..." йыры ғүмерлеккә хәтеренә һеңеп ҡала йырсының.

Бөгөн билдәле йырсылар Абдулла Солтанов, Сөләймән Абдуллин ише шәхестәрҙән өлгө алып, әммә тормошта үҙ һуҡмағын ярырға тырышып йәшәй йырсы. Сәхнәлә лә тик үҙе генә булып ҡалыу, үҙенә генә хас образдар һынландырыу уның төләге. Репертуарындағы һәр йырҙың төбөнә төшөп, эстәлеген тәрәндән аңлап башҡарыуы ғына ла Баязит Байназаровтың сәнғәт донъяһында үҙ йөҙөн, үҙ булмышын һынландыра. Ә инде актерлыҡ һәләте, башҡарыу оҫталығы, тырыш һәм ныҡышмал хеҙмәте һәр сығышына күркәмлек өҫтәй, тәбиғилек бирә.

Бөгөнгө тамашасыларҙың үтә лә талапсан, аңлы һәм һиҙгер булыуын иҫтә тотоп, Баязит һәр сығышына ентекле әҙерләнә, башҡараһы йырҙарын, ролдәрен тәрәндән өйрәнә. Буш ваҡытын һис кенә лә әрәмгә үткәрмәй ул: йә, фортепиано артына ултырып, тауышын көйләй, йә булмаһа, бергә эшләгән иптәштәре менән шаярып ҡына уйнайны ролен шымарта. Шуғалыр ҙа инде, сәхнәлә артист үҙен иркен һәм тәбиғи тота. Тамашасыһы уның йыр-моңон тыңлап ҡына түгел, ә рухи азыҡ, күңеленә ял, илһам алып ҡайтһын өсөн тырыша талантлы йырсы. Ана шул ябайлығы, дан өсөн түгел, нәҡ ябай тамашасы өсөн эшләүе менән дә арбай ул кешеләрҙе. Һәр йырҙы үҙ итеп, яратып башҡарыу бар йырсыларға ла хас түгел, Баязит Байназаров халыҡ йырҙарын да, күптән онотолған йырҙарҙы ла, бөгөнгө эстрада йырҙарын да берҙәй оҫталыҡ һәм ихласлыҡ менән сәхнәгә алып сыға. Сығыштары ваҡытында дәртләнеп бейеп китеүе, актерлыҡ һәләте тамашасы күңелендә үҙенә ҡарата һөйөү һәм ихтирам тыуҙыра.

Репертуарын тулыландырған ваҡытта Баязит иң элек йырҙарҙың эстәлегенә, уларҙың көйөнә иғтибар итә. Сөнки әлдексә йырҙарҙың милли сәнғәтебеҙҙең бәсен, йырсыларҙың абруйын төшөрөүсән бик яҡшы тоя ул. Үҙенсәлекле тауышлы йәш йырсыларҙың ике-өс һүҙҙе ҡабатлай-ҡабатлай сәхнә буйлап йүгереүсән ваҡытлыса дан артынан сабыуға тиңләй. Ысын моң һәм йыр майҙанында ваҡытлыса иҡәнлектәрен айырырға өйрәнһендәр ине улдайҙар, ти хәҙер инде ярайһы ғына тәжрибә туплаған профессионал йырсы. Уның был һүҙҙәрен "аҡыллыға - ишара" тип уйларға кәрәктер...

Бөгөн күпселек профессионал артистар араһында модаға ингән "фанераға" йырлауға ла үҙ фекере, үҙ ҡарашы бар Баязиттың. "Тере тауышҡа йырлағанда бит үҙеңә бөтмәҫ кинәнес алаһың, рухи күтәренкелек кисерәһең, тыңлаусыларына үҙеңдең энергетиканды еткерә алаһың... Ҡыҫҡаһы, үҙ тауышы менән тамашасы алдына сыҡҡан йырсы үҙ-үҙен үҫтерә", - ти ул "фанерасы"ларға ҡарата үҙ баһаһын биреп.

Республикабыҙҙа танылыу алған, тамашасылар араһында ихтирам ҡаҙанған йырсы башҡаларға өлгө булырҙай абруйлы ғаилә башлығы ла. Үҙе менән Сибай концерт-театр берекмәһендә эшләгән хәләл ефете Гөлнара Исмәғил ҡыҙы менән бергә ике ҡыҙ үҫтерәләр улар. Алла бирһә, ошо көндәрҙә өсөнсө сабыйҙарын ҡулдарына аласаҡтар. Байназаровтарҙың иркен фатирында һәр кемгә ишек асыҡ - иҫәпһеҙ-һанһыҙ туғандары ла, дуҫтары ла, бергә эшләгән иптәштәре лә уларҙа берҙәй ҡәҙерле ҡунаҡ.

**Мотал РӘМОВ.**
**Сибай ҡалаһы.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

## ЫСТА-ЫСТА...

**"Киске Өфө" гәзитен яратып уҡыйым. Һәр мәҡәлә фәһемле, уҡымлы, уйландыра. Һуңғы биттә сыҡҡан "Әсәйем лөғәте" рубрикаһы айырыуса ҡыҙыҡлы. Үҙебеҙҙең яҡтағы һөйләштә генә йөрөгән бер нисә һүҙҙе яҙмаҡсымын.**

**Ҡыйғыпыр** - кәрәкмәгән әйберҙәр.
**Һырыш** - кешегә инеп барыусы. Һырышып инеп килә.
**Шипан** - шаян, һырыш кешегә ҡарата әйтелә. Ғәҙәттә, ир кеше ҡатынға йәки ҡатын иргә бәйләнгән осраҡта "Шипандама" тип әйтелә.
**Шиҡ** - шаяртам, илап ҡуйма, тип ҡыҫҡартып әйтә торған инек. Шаяртып әйткәндән һуң әйтелә.
**Лыпын** - ергә, иҙәнгә йәки башҡа ергә тығыҙ инеп ятҡан нәмәгә ҡарата әйтелә. Лыпын иҙәнгә ятҡан. Йәки ныҡ, торғоҙоп алып булмаған әйбергә әйтелә.
**Быҙмырҙама** - ый, оҙаҡлап йөрөгән кеше. Быҙмырлап тик йөрөй.
**Бысый** - сей йәки бешеп етмәгән икмәк.
**Мыңғырҙама** - эстән нимәләр әйтә, тик аңлашылмай.
**Хәстрүш** - үтә маҡтансыҡҡа йәки "текә" кейенгән кешегә әйтелә.
**Шапата, шапшаҡ** - әрһеҙ, бысраҡ.
**Шилма** - шаян.
**Бәсмилла** - аптырау хәлендә ҡалғанда әйтелә.
**Шапылдама** - ашағанда тауыш сығарып ашай, һыу кискәндә сәсрәтә.
**Бысҡылдай** - ямғыр һибәләй, бысраҡта шапылдап атлай.
**Лыҡма, лыҡысма** - ямғырҙа һыуланғанда әйтелә.
**Һәптәндәй, һәптәндәмә** - оҙаҡлап йөрөүсегә ҡарата әйтелә.
**Һәлберәп** - арып-йонсоп торғанда әйтелә.
**Ыста** - аптырғанда әйтелә.

**Рүзидә ҒӘЙФУЛЛИНА.**
**Белорет районы Үткәл ауылы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## АҠСА ЙЫЙЫУ...
### ярты аҡыллылыҡ билдәһе

Йомарт малын үҙе ашар, һаран малын эт ашар.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Тыуған илде бөйөк булған өсөн түгел, ә үҙеңдеке булған өсөн һөйәләр.

**(Сенека).**

Бай булырға түгел, аҡыллы булырға тырыш - байлыҡтан яҙырһың, аҡыл һәр саҡ үҙең менән ҡалыр.

**(Эзоп).**

Бай булыр өсөн тырышып аҡса йыйыу - ул ярты аҡыллылыҡ йәки түбән йәнлелек билдәһе ул.

**(С. Франк).**

Байрам итеү ғәҙәте менән бергә кешегә эс бошоу сифаты ла бирелгән.

**(Ж. Лабрюйер).**

Аҡһөйәктәр йәмғиәтендә кемдәрме? Йөрәкһеҙ ҡыҙ-ҡатындар һәм мейеһеҙ ирҙәр йыйылған унда һәм улар бер-береһенә торорлоҡ.

**(А. Детуш).**

Ҡартлыҡтағы яңғыҙлыҡ - йәшлектәге гонаһтарың өсөн түләү ул.

**(Сюзанна Линдгрен).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Был хәл Сөләймән бәйғәмбәр заманында була. Бер кеше тирләп-бешеп бәйғәмбәр һарайының ҡапҡа төбөнә килеп туҡтай. Уның ҡурҡыуҙан ағарынған йөҙөн күреп, бәйғәмбәр "Ни булды?" тип һорай. "Мин Ғазраилды күрҙем, - ти кеше. - Ул миңә шул тиклем асыуланып ҡараны". "Ә мин нимә эшләй алам?" тип һорай унан тағы ла Сөләймән бәйғәмбәр. "Ел менән өрҙөрөп, мине Һиндостанға алып барып төшөр. Шулайтып, мин Ғазраилдан йәнемде ҡотҡарып ҡалайым..." Бәйғәмбәр уның үтенесен үтәй: елгә был кешене Һиндостандың үҙәгенә үк осороп алып барып ташларға бойора.**

**Икенсе көндө Сөләймән бәйғәмбәр Ғазраилды осрата һәм: "Һин ни өсөн ул кешегә асыуланып ҡараның, ул ҡурҡышынан ғаиләһен һәм илен ҡалдырып, сит тарафтарға ҡасып китте", - ти. "Мин уға асыуланып ҡараманым, - ти Ғазраил. - Алла миңә: "Иртәгә һин Һиндостанға бар һәм ул кешенең йәнен ал!", - тип бойорҙо. Ә ул кеше бында йөрөп ята. Ул иртәгә нисек итеп Һиндостанға барып етә алыр икән, тип аптырап ҡараным мин уға..."**

**Бына шулай, беҙ йыш ҡына үҙ-үҙебеҙҙән ҡасабыҙ. Алланан да ҡасып ҡотолорға теләйбеҙ. Был бит файҙаһыҙ. Яҙмыштан, Алла ҡушҡандан ҡасып булмай..."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: Гөлфиә ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт: Ләйсән НАФИҠОВА, Зөйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
Беҙҙең блог: blog.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@mail.ru

«ПечатниК» ауаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Баш мөхәррир урынбаҫары 246-03-24
Бухгалтерия 246-03-23
Хәбәрселәр 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 8 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 4877
Заказ 610/04